- Алтмыш, һиңә ни ҡылдым?
- Аяғыма бау һалдың, ҡолағыма шау һалдың!
- Етмеш, һиңә ни ҡылдым?
- Уртымдағы теште алдың, башымдағы һушты алдың!
- Һикһән, һиңә ни ҡылдым?
- Маңлайҙағы күҙҙе алдың, бурбайҙағы биҙҙе алдың!
- Туҡһан, һиңә ни ҡылдым?
- Ауыҙҙағы һүҙҙе алдың, илтеп ләхеткә һалдың!

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25 - 31 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№4 (578)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Баймаҡ энциклопедияһы"- бер район тарихы ғына түгел 6



Ҡурайҙы башҡорт ерлегенән айырһаң... ул биш тишекле һыбыҙғы ғына булаҫаҡ 8-9



Милли мөхитебеҙ... Мәскәүҙә лә булһын, тип 11



Донъялар ни өсөн тарҡалған? 12-13



14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ғилемле, заманса ҡарашлы зыялы кеше булыу өсөн юғары уҡыу йортонда белем алыу мотлаҡмы?

***Кадир МӘҒӘФУРОВ, иҡтисад фәндәре докторы, профессор:*** Кеше өсөн юғары белеме булмауға ҡарағанда уға эйә булыу яҡшыраҡ, әлбиттә. Ә бына хәлле, етеш кеше булыр өсөн был мотлаҡ та түгелдер, бәлки. Бигерәк тә бөгөнгө Рәсәй тәжрибәһе күрһәтеүенсә, шулай уйларға нигеҙ бар. Вузда уҡыу - ул бит белем алыу түгел, ә белемде алыу юлдарына, ысулдарына өйрәнеү."Юғары уҡыу йортонда белем бирмәйҙәр, ә уны алалар" тигән билдәле лаҡап тап бына ошондай осраҡта әйтеләләр ҙә инде. Бер кем дә бер ваҡытта ла юғары уҡыу йортонда уҡып, етерлек белем алып сыҡмай ул, кеше ғүмере буйы туҡтауһыҙ белемгә ынтылырға, аң-зиһенен камиллаштырырға бурыслы. Шунһыҙ, әгәр ҙә ул, инде белем алдым, тип, ғилемгә ынтылышын туҡтатһа, мәктәп тамамлаған уҡыусы менән бер кимәлдә тороп ҡаласаҡ. Ә инде белем алыу юлдарына эйә кеше үҙенең тормош күҙәтеүҙәре аша ла, китаптар уҡып та, башҡалар менән аралашыуҙар аркылы ла, бөгөнгө мәғлүмәт сығанаҡтарының бай арсеналдары ярҙамында ла ғүмеренең аҙағынаса өйрәнә, белем туплай, аҡыл кимәлен камиллаштыра бара, шуның менән үҙенең һөйләгән һүҙҙәре, ҡағыҙға төшөргән яҙмалары йә булмаһа хеҙмәттәре менән йәмғиәттә ҡала, дөйөм кешелек ҡиммәттәрен байытыуға, дөйөм белем системаһын тулыландырыуға булышлыҡ итә, йәғни ғүмере буйы аҡыл туплай. Кеше булмышын тәьмин итеүсе төп өс асылдың береһе - аҡыл тип юҡҡа ғына ҡаралмай бит, юғиһә. Беренсеһе унын - йән - Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелһә ( әйткәндәй, бының шулай булыуы һуңғы йылдарҙағы фәнни ҡараштар тарафынан инҡар ителмәй), икенсеһе унын - тән - Дарвин фекере яҡлылар ҡарашынса, маймылдан бар булыу теорияһы һәм өсөнсөһө - әлеге лә баяғы аң - социумға бәйле үсеш эволюцияһы кисерә һәм йәмғиәттең дә белем кимәлен күтәрә. Кешелектең тәүге ике асылынан ошо һуңғыһын айырып алып ҡарау мөмкин түгел, сөнки был осраҡта кешене белемһеҙ, тип кенә лә ҡарап булмаясаҡ - белем, тимәк, аң үҫеше булмаһа, ул тулы кимәлдә кеше була алмай, ә хайуанға әйләнәсәк. Бына ни өсөн кәрәк кешегә аңды формалаштырыусы белем тауҙарына юл.

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы:*** Юғары белем, хатта унан да юғарыраҡ белем һәр кешегә мотлаҡ кәрәк. Ләкин юғары белем тураһында дипломлы булыу - ул бит юғары белемле булдым, тигән һүҙ түгел. Диплом ул теге йәки был эшкә урынлашыу өсөн кәрәк. Ә белем ғүмер буйы үҙенә лә, балаларыңды тәрбиәләгәндә лә, кеше менән аралашҡанда ла, ғөмүмән, йәшәү өсөн кәрәк. Юғары уҡыу йортона уҡырға ингән студенттар зиһендәренең яҡты сағын, йәшлек дәртен, ваҡыт мullығын тейешенсә файҙаланып, мөмкин тиклем белем алырға тырышһындар ине. Үҙ предметтары буйынса ғына түгел, ә ҡайҙа ғына, ниндәй генә һөнәр буйынса уҡыһалар ҙа, халҡыбыҙ тарихы, халҡыбыҙ традицияһы, мәҙәниәтебеҙ буйынса ла мөмкин тиклем күберәк белергә, туған телдәрен байытырға тырышһындар ине. Сөнки кеше, ниндәй генә юғары белемгә эйә булмаһын, туған телен, туған традицияларын, халҡы тарихын белмәһә, барыбер наҙанлыҡ, тип уйлайым.

(Дауамы 2-се биттә).

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МӘҘӘНИӘТ ЙЫЛЫНА...

## башланғыс бирелде

2014
МӘҘӘНИӘТ ЙЫЛЫ
ГОД КУЛЬТУРЫ

**Быйыл республикала иғлан ителгән Мәҙәниәт йылы старт алды. Ул рәсми рәүештә Өфө сәнғәт училищеһының концерт залында БР Милли симфоник оркестры ҡатнашлығында "Башҡорт композиторҙары мираҫы" тип аталған программа менән асылды.**

(Дауамы 16-сы биттә).



ИШАРА

# ШӨКӨР ИТЕРГӘ ОНОТМА!

**Бер көн иртә таңдан уяндым да, үҙемде-үҙем әрләп алдым: "Ниңә бар донъя өсөн көйөнәһең дә ултыраһың? Ниңә, шөкөр, тип кенә йәшәмәҫкә һиңә?" - тигән булдым. Әммә был уйҙарым күп булһа бер сәғәткә барғандыр, телевизорымды тоҡандырып, ундағы яңылыҡтар тапшырыуын ҡарарға ултырыуым булды, диктор һөйләгән ваҡиғалар ыңғайына тағы борсола башланым…**

Эйе, шөкөр, тип кенә йәшәп булмай шул. Телевизорҙан тапшырылған ҡурҡыныс хәбәрҙәр - бер хәл, һәр беребеҙҙең тормошонда былдай зарланырлыҡ мәлдәр булып тора. Беҙ, өлкәндәр, мәҫәлән, почта, магазин, поликлиника юлын йыш тапайбыҙ бит инде. Мине ошо пункттарҙы халыҡтан алыҫлаштырыу мәсьәләһе борсой бөгөн. Оптималләштереү уларҙы ла ялмап алды. Иң тәүҙә өйөмә яҡын урынлашҡан "Башинформсвязь" бүлеген, аҙаҡ почта бүлеген яптылар. Тиҙҙән поликлиникабыҙҙы ла икенсе урынға күсерәсәктәр, тиҙәр. Беҙҙең тирәлә унда ла, һулда ла банк биналары ғына тороп ҡалып бара. Торлаҡ-эксплуатация участкалары ла ирәүәнләп китте. Элек бөтә эштәрҙе бер бинала башҡарып сығып була ине, әле торлаҡ-эксплуатация участкаһы етәксеһе менән сәркәтибе - бер бинала, бухгалтерҙар икенсе бинала ултыра, ә квитанцияларҙа тәҙәтеү индереү өсөн дүрт туҡталыш үтеп, өсөнсө бинаға барырға тура килә. Почтаға ла ике квартал ары үтергә кәҙәр. Ниңә шулай дәүләтебеҙ башҡарған эштәрҙән халыҡтың хәле хөртәйә? Булған уңайлыҡтарҙы ниңә емерергә? Тегендә-бында һуғышып йөрөгән 72-80 йәшлек замандаштарымды йәлләп ҡуям да, бер ни ҡыла алмауым көйөфтө төшөрә.

Ә шулай ҙа, гелән былай борсолоп ултырып булмаҫ, тип, күңелде күтәрер, рухты дауалар ысул таптым. Уянып, йәһәт кенә йыуынып, сәй эсеп алам да, китаптар, журналдар, гәзиттәр уҡырға тотонам. Рухты дауалауҙың иң һәҙәмтәле ысулы - матур шиғыр уҡып алыу, әлбиттә. Быны шағирыбыҙ Рәми Ғарипов 1961 йылда яҙған "Дингеҙ һәм сабый" шиғыры. Уны, ниңәлер, әлеге ҡатмарлы заманға оҡшатам һәм аҙ һанлы милләттәргә арналған һымаҡ ҡабул итәм. Иҫегеҙҙәме?

*Төсө ҡаскан. һары бурьяҡ баҫҡан,*
*Ни булған һуң бөгөн диңгеҙгә?*
*Ел дә юҡ бит, ә ул ҡоторона!*
*Ҡоторона шулай елһеҙ ҙә...*

*Ситлектәге ас арыҫлан һымаҡ,*
*Дулап йөрөй, һыймай ярына.*
*Сал ялдарын сайҡап, асыу менән*
*Ҡорбанынмы көтөп ярһына?*

*Бер сабыйға әллә асыу итеп,*
*Йоторғамы уны самалай?..*
*Ярҙа уға бер ҙә иҫе китмәй,*
*Таш ырғытып йөрөй бер малай!..*

Һиҙәһегеҙме, глобалләшеү диңгеҙен һәм сабый милләттәрҙе һынландырған бит шағир. Мәҫәлән, беҙҙең башҡорттар бик боронғо, тәрән тамырлы милләт булһа ла, сабыйҙарса бер ҡатлылыҡтан һаман арына алмай. Бәлки, беҙҙең шундай булыуыбыҙ, юҡҡа-барға иҫебеҙ китеп бармауыбыҙ яҡшылыҡтыр ҙа. Ҡурайыбыҙҙы, йыр-моңдарыбыҙҙы, һоҡланғыс гүзәл туған телебеҙҙе һаҡлап, ҡурсалап йәшәүҙе дауам итергә кәрәк, тим. Рәми Ғариповтың әлеге шиғырын уҡып, шундай уйға килдем. Эйе, глобалләшеү, оптималләшеүҙәрҙән ҡурҡыуға төшөп түгел, илебеҙҙе, телебеҙҙе ҡурсалап йәшәүҙе дауам итәйек! "Шөкөр!" тип әйтергә лә онотмайыҡ.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ғилемле, заманса ҡарашлы зыялы кеше булыу өсөн юғары уҡыу йортонда белем алыу мотлаҡмы?

**(Башы 1-се биттә).**

***Сәриә ҒАРИПОВА, Башҡорт дәүләт университеты магистранты:*** Тормошҡа ҡарашын киңәйтергә, белемен арттырырға теләгән йәш кеше юғары белем алырға тырышырға тейештер ул, сөнки был заман талабы. Юғары белем эшкә урынлашыуҙа, тормошта үҙ урыныңды табып, үҙең теләгәнсә донъяңды ҡороп, яҡшы итеп йәшәргә, аҡса эшләргә мөмкинлек бирә, тигән фекерҙәмен. Белемде үҙаллы ла алырға була бит, тиерҙәр, бәлки, әммә йәш кеше юғары уҡыу йортонда үҙенән олораҡ уҡытыусылары ярҙамында донъяға ҡарашын формалаштыра, уҡытыусылар, профессорҙар студенттарына үҙ тормош тәжрибәһе, киң ҡараш һәм белем даирәһе аша һабаҡ бирә. Йәш кешегә төрлө мөхиттә, төрлө кешеләр менән аралашып алыуҙың зыяны юҡтыр, тием. Мәҫәлән, үҙемдән сығып ҡына әйткәндә лә, ҡайһы бер нәмәләргә элекке ҡараштарымды үҙгәртеп ҡорорға ла тура килде. Ауылдан килгәс,"үҙ биләмән"дең тейелгеһеҙлегенә күнегелгән булһа ла, университеттың ятаҡ тәртиптәренә лә өйрәнергә, үҙемдә күп нәмәләргә ҡарата түҙемлек, сабырлыҡ, ҡайһы бер нәмәләргә килешеп ҡарау кеүек сифаттар тәрбиәләргә, ҡыҫҡаһы, үҙемдең ғәҙәт-ҡылыҡтарымды үҙгәртергә тура килеүен билдәләмәй булмай, сөнки коллектив эсендә йәшәгәндә иптәштәреңдең мәнфәғәте менән иҫәпләшергә тура килә. Быныһы бер ни тиклем тәрбиә яғына ҡағылһа, аң кимәлен үҫтереү, заманса фекерләү ҡеүәһен булдырыу йәһәтенән дә вузда уҡыуҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Бының өсөн юғары уҡыу йорттарының мөмкинлектәре ҙурыраҡ, унда булған аң-белем сығанаҡтары һәм даирә кимәле юғарыраҡ.

***Камил БАЙМЫРҘИН, Өфөләге университеттарҙың береһендә ситтән тороп уҡыу бүлеге студенты:*** Минеңсә, юғары белем мотлаҡ түгел, сөнки бөгөн илгә дипломлы белгестәр кәрәкмәй, эш юҡ. Шәхси эшҡыуарға ялланып, кеше байытҡансы, үҙең өсөн эшләһәң, мең артыҡ, тигән фекерҙәмен. Иң яҡшыһы - берәй өлкәлә үҙ эшеңде асып, тыныс ҡына эшләйһең дә йөрөйһөң. Диплом исем өсөн генә, йәмғиәттә үҙ статусыңды таныту өсөн генә кәрәк ул, тип уйлайым. Ләкин мин тәүҙән үк шулай уйламай инем. Мәктәпте тамамлағас, үҙ теләгем менән ошо университетҡа уҡырға индем. Йөрөй торғас, ни күрәм: күптәр белем алырға бер ҙә атлығып тормай: зачет-имтихандарҙы ла, хатта дипломды ла һатып ҡына алалар. Йәнем көйөп, уҡыуҙы ташланым да, армияға киттем дә барҙым. Ҡайтҡас, атай-әсәйҙең һүҙен йыҡмайым, тип, барыбер шунда уҡ ситтән тороп уҡыу бүлегендә уҡыуҙы дауам иттем. Ләкин ситтән тороп уҡыуҙың ни икәне билдәле: ул уҡыуҙан ситтә тороу менән бер бит инде. Диплом алған сүрәттә лә үҙ һөнәрең буйынса эш табып булмаясаҡ. Ә инде белем кимәлеңде, аң-зиһенеңде үҫтерәм, тиһең икән, бында бер ниндәй ҙә диплом ярҙам итмәйәсәк, әгәр кешенең башында булмаһа...

***Зөлфиә СИБӘҒӘТУЛЛИНА, хаҡлы ялдағы уҡытыусы:*** Юғары уҡыу йортонда уҡымайынса ла һәр йәһәттән белемле булған бер иптәште беләм. Ҡулына килеп эләккән башваҡҡыстарҙы шунда уҡ сисә һала. Ниндәй генә һорау бирмә - уның яуабы әҙер. Уҡымаған китабы ла юҡ шикелле уның. Әммә беҙҙең, юғары уҡыу йортонда уҡыған кешеләрҙең араһына килеп инһә, ул юғалып ҡала, донъяуи хәлдәр тураһында һөйләшеүҙәребеҙгә ҡушылмай тиерлек. Тәүҙәрәк аптырай инем уның үҙ-үҙен тотошона, аҙаҡ аңланым: юғары уҡыу йортонда уҡығанда ҡайһы бер китаптарың уҡылмай ҡалырға ла мөмкин, әммә һин белем донъяһы мөхитендә ҡайнайһың, аралашаһың, теге йәки был мәғлүмәткә ҡолағың сите менән генә булһа ла ишетәһең, күҙҙәрең бик күптәргә танып белә башлай. Һәр хәлдә, һин белем алыуҙың бар юлдарын сырамытырға, ҡайҙа инергә, нисек сығырға икәненә өйрәнәһең. Ә баяғы минең танышым бына ошо мөһим этапты үтмәгән - студент булмаған. Тимәк, ғилемле, заманса ҡарашлы булып өлгөрөү өсөн кеше биографияһында барыбер ҙә студент йылдары ла теркәлергә тейеш.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ИЛ-ЙОРТҠА КЕМ ХУЖА?

Уҡыусылар менән осрашыуҙарҙың береһендә бер ҡатын шундай һорау бирҙе:

-Гидрометеорология үҙәгендә башҡорттар ғына эшләйме ни ул? Радионан йә телевидениенан һауа торошо тураһында мәғлүмәт тапшыра башлаһалар, икенсе милләттән булған бер ҡатын гел генә: "Ана, башҡорттар тағы алдай башланы", - ти ҙә торасы. Ғөмүмән, республикала ниндәй насар хәл-ваҡиға була, янғын сығамы, кеше үлтерәләрме, ямғыр яуамы, урамдар таҙартылмай ятамы - барыһында ла башҡорттарҙы ғәйепләйҙәр. Ниңә шулай ул?

-Томаналарға үпкәләргә, йә яуап әҙләп, тел әрәм итергә ярамай, - тип кенә яуаплап ҡуйырға уйлағайным, апайҙың ирендәре ҡалтырап, илар сиккә еткәнен күргәс, һүҙемде дауам иттем:

-Беҙ ошо ерҙең, ошо йорттоң хужалары. Әгәр ҙә һинең йортоңда тәртипһеҙлек, бысраҡлыҡ икән, уны ваҡытында йыйыштырмайҙар, йә унда ниндәйҙер енәйәт ҡылына, йә йәшәйеш ҡағиҙәне боҙола икән, бының өсөн йорт хужаһы ла яуаплы бит. Шуға ла бар ғәйепләүҙәрҙе башҡорттарға япһаралар икән, беҙ быға үпкәләмәйек, ә уйланайыҡ. Ил-йорт хужаһына лайыҡлы сифаттарға, егәрлелеккә, дәрәжәгә, тәртипкә өлгәшәйек, хатта шул уҡ күҙгә төртөп, бар нәмәлә башҡаларҙы ғәйепләргә әҙер торған һәмһәҙҙәргә тапҡыр яуап бирерлек кимәлдә булырға тырышайыҡ. Ә беҙ ниндәй хужалар һуң? Шулай шул бына...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Сочиҙағы XXII ҡышҡы Олимпия һәм XI ҡышҡы Паралимпия уйындарына Өфөнән биш тонна юғары сифатлы бал оҙаттылар. Башҡортостан апитерапия һәм умартасылыҡ буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге республиканың бренд тауары менән 1 февралдән алып 16 мартҡа тиклем үтәсәк "Рәсәй ынйыһы" махсус күргәҙмә-йәрминкәлә ҡатнашасаҡ. Олимпия уйындары спортсылары һәм тамашасылары өсөн күргәҙмә-йәрминкә махсус ағастан эшләнгән өйҙәрҙә урынлашасаҡ. Башҡортостан умартасылары ҡарамағына бирелгән ошондай ике өй "Бәрхәт миҙгелдәре" комплексы территорияһының төрлө өлөшөндә урынлашҡан.

✔Башҡортостан халҡы Яңауылда газ шартлауҙан зыян күреүселәргә миллион һум самаһы аҡса йыйҙы. Аҡса йыйыу тәүлек әйләнәһенә дауам итә. Республика халҡы аҡса менән генә түгел, ә янғындан бөлгән кешеләргә кәрәкле кейем һәм башҡа әйберҙәр менән ярҙам итә. Көсөнән килгәнсе ярҙам итергә теләүселәр өсөн ҡабул итеү пунктының адресы: Өфө ҡалаһы, Ғафури урамы, 9/1, "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының дәүләт унитар предприятиеһы (инеү Пушкин урамы яғынан).

✔Өфө ҡала округының Ленин районы хакимиәте башлығы итеп Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған иҡтисадсыһы Альбина Йосопова тәғәйенләнде. Альбина Сәғит ҡыҙы 2001 йылдан алып Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары булып эшләне.

✔2013 йылда республиканан армия сафтарына 12 мендән ашыу кеше саҡырылған. Көҙгө саҡырылышта хеҙмәт итеү урындарына 6700 самаһы егет киткән. Бынан тыш, 295 үсмер Оборона министрлығының һәм башҡа федераль органдарҙың хәрби уҡыу йорттарына уҡырға ингән.

✔Башҡорт дәүләт педагогия университеты, дәрәжәле "World Miss University-2014" халыҡ-ара матурлыҡ конкурсында Рәсәйҙән сығыш яһаусы -башҡорт филологияһы факультетының бишенсе курс студенты Айгөл Вәлиева өсөн тауыш бирергә саҡыра. Ошо көндәрҙә Көньяҡ Кореяла барған абруйлы конкурста енеү уларға яҡташыбыҙҙың бөтә мөмкинлектәре бар. Башҡорт һылыуына һәр кем ярҙам итә ала. Әле конкурстың рәсми сайтында тауыш биреү бара.

БӘХӘС ҠОРО

# ИРҘӘР БУЙҘАҠЛЫҒЫНА...

## баҙар иҡтисады ла, ҡатын-ҡыҙ ҙа ғәйепле



**Бөгөнгө Рәсәйҙә уникаль хәл килеп тыуҙы: ҡатын-ҡыҙҙар иҫәбе ир-егеттәрҙекенән 10 миллионға артығыраҡ. Был хәл, билдәле, енестәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙә, ғаилә тормошонда ҙур үҙгәрештәр тыуҙырҙы. Бында хатта матриархат килеүен төҫмөрләргә лә булалыр.**

Иҡтисадсы булараҡ, баҙар шарттарында барлыҡҡа килгән яңы күренештәрҙең сәбәптәрен аңларға, аңлатырға тырышам. Бына ир-ат менән ҡатын-ҡыҙ араһындағы мөнәсәбәттәр үҙгәреше буйынса бер нисә күҙәтеү. Эстрада артистары араһында ҡатын-ҡыҙ булып ҡыланған ир-егеттәрҙең иҫәбе-һаны юҡ. Ҡатын-ҡыҙҙың тәмәкене ир-егеттәргә ҡарағанда күберәк тарта башлауы барыбыҙға ла мәғлүм. Һуңғы ваҡытта төрлө табындарҙа ултырғанда был хәлде эскелек буйынса ла күҙәтеп була: өҫтәл артында ултырған ир-егеттәрҙең күпселеге спиртлы эсемлектәргә бөтөнләй ҡағылмай, ә ҡатын-ҡыҙҙар бер ҙә тартынып тормай, рюмкаға үрелә һәм уны "үбеп" булһа ла ҡуя. Никах теркәү бюролары мәғлүмәттәре буйынса, кейәүгә сыҡҡас, ҡыҙ фамилияларында ҡалырға теләүсе ҡатын-ҡыҙҙар иҫәбе арта бара. Ауылдар - буйҙаҡ егеттәр, ә ҡалалар ҡарт ҡыҙҙар менән тулды. Ауылдарҙағы буйҙаҡтарға кәләш итеп алырлыҡ ҡыҙҙар ҡалманы, ә ҡалалағы ҡыҙҙар үҙ алдына донъя көтөп, машина, фатир алып йәшәй бирә. Был ҡыҙҙар асыҡтан-асыҡ "Миңә ир кәрәкмәй", тип белдерә хатта (Ысынлап та, ҡалала ирҙәр башҡара торған хужалыҡ эштәрен төрлө хеҙмәттәр аша хәл итергә була. Тимәк, был өлкәлә ирҙәргә ихтыяж юҡ). Артабан киттек. Күптәр өсөн ғаиләне тарҡатыу бер ни ҙә тормай. Ир йәки ҡатындың бер яғы оҡшамаһа, уны берәй тауар һымаҡ, "кире ҡайтарып биреү" (уртаҡ бала булһа ла) бик еңел атҡарыла. Ғөмүмән, бәхетле ғаилә төҙөү һирәк күренешкә әйләнә. Никахһыҙ йәшәү өҫтөнлөк итә. Ул ғына ла түгел, бер енесле никахтар тураһында ла һүҙ ҡуйыртыла.

Килендең кейәү йортона төшөү йолаһы ла үҙгәрә: күп ир-егеттәр ҡыҙ яғына барып төпләнеүҙе хуп күрә. Ул ғына ла түгел, егеттәрҙең үҙенән олораҡ ҡатын-ҡыҙҙарға өйләнеүе лә ғәҙәти күренешкә әйләнә башланы. Алла Пугачева үҙенән 18 йәшкә кесе Филипп Киркоров менән ғаилә ҡороп йәшәп алғас, хәҙер 27 йәшкә кесе Максим Галкин менән "йәшәреп" йөрөй. Былдай миҫалдар Рәсәй богемаһында йыш осрай. Үҙенең әсәһенән дә олораҡ миллионерша ҡатынға өйләнгән йырсы Прохор Шаляпиндың асыҡтан-асыҡ "Мин уға аҡсаһы өсөн өйләндем" тиеүе бер кемде лә аптыратманы шикелле. Был күренеш беҙҙең Башҡортостанда ла тарала башланы. Үҙенең әсәһенән оло ҡатын менән йәшәй башлаған егеттәр тураһында хәбәрҙармын. Былдай мөнәсәбәттәрҙә яратыу бармы-юҡмы, был мәсьәләгә ҡағылмайым.

Яңыраҡ Рәсәй Фәндәр академияһының Психология институты үткәргән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһенә юлыҡтым. Һуңғы 30 йыл эсендә беҙҙең илдә йәшәүсе кешеләрҙә кире сифаттар һиҙелерлек артҡан, ә ыңғай сифаттар, киреһенсә, кәмегән. Урлыҡ, ришүәтселек, үлтереш артыуы баҙар иҡтисады менән бәйләнгән икәнен аңлатыу артыҡтыр. Ә юғарыла күрһәтеп үтелгән үҙгәрештәрҙең ошо уҡ шарттар арҡаһында барлыҡҡа килеүен иҫбатлап ҡарайым.

Һуңғы 30 йыл эсендә Рәсәй иҡтисадының структураһы һиҙелерлек үҙгәрҙе. Совет осоронда дәүләт сәнәғәт, ауыл хужалығын үҫтереүгә төп иғтибар бүлә ине. Был тармаҡтарҙа башлыса ир-егет эшләне. Улар алған эш хаҡы сағыштырмаса юғары булды, һәр хәлдә, ғаиләһен ҡарарға етә ине. Ҡатын-ҡыҙҙар башлыса еңел сәнәғәт, мәҙәниәт, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау тармаҡтарында эшләне. Баҙар шарттарында ир-егеттәр эшләгән тармаҡтар бөлгөнлөккә төштө, сәнәғәттән тик сеймал сығарған тармаҡтар ҡалды. Уларҙың Себер, Алыҫ Көнсығыш тарафтарында ғына урынлашыуы вахта ысулының киң таралыуына булышлыҡ итте. Ир-егеттәр араһында булған эшһеҙлек 90-сы йылдарҙа эскелектең киң таралыуына килтерҙе. Ҡатын-ҡыҙҙар яңы шарттарға тиҙерәк ҡулайлашты: ҙур физик көс талап итмәгән ауҙа, эшҡыуарлыҡ, сервис кеүек тармаҡтар башлыса ҡатын-ҡыҙҙар тарафынан үҫеш алды.

Бөгөн тулайым продукттың тик 40 процентын ғына тауар етештереү тәшкил итә, а ҡалған 60 процентын халыҡты хеҙмәтләндереү тармаҡтары тулыландыра. Банктар, төрлө финанс хеҙмәте, ауҙа, сервис, туризм, мәғлүмәт һәм телекоммуникация, интернет, медицина, күңел асыу, спорт, машиналар, фатир һатыу һ.б. кеүек өлкәләрҙә эшләүселәр араһында ҡатын-ҡыҙҙар өҫтөнлөк алды. Уларҙың түбәнерәк эш хаҡына еңелерәк ризалашыуы яңы Рәсәй капиталы өсөн бик отошло булып сыҡты. Тик ир-егеттәр өсөн түгел. Власть алып барған миграцион сәйәсәт тә Рәсәй ир-егеттәре өсөн ҙур һынау булды: түбән эш хаҡына риза булған гастарбайтерҙар төҙөлөш, транспорт, торлаҡ-коммуналь хужалығын баҫып алды. Был шарттарҙа көслө заттың хәле тамам мөшкөлләнде: бөгөн улар ғаилә көтөрлөк йүнле эшкә урынлаша алмай ҡаңғыра. Шул арҡала уларҙы кем генә ялҡаулыҡта ғәйепләмәй. Тәү ҡарашҡа, был дөрөҫ һымаҡ та. Әммә бер кемде лә һатыусының тауарҙы түбән хаҡҡа һатҡыһы килмәгәне аптыратмай, ә ниңә ир-ат ошо аҙымға барырға, йәғни хеҙмәтен арзанға һатырға тейеш һуң? Әммә эҙемтәләр һиҫкәндерә: хәҙер физик эш менән шөғөлләнергә теләмәгән яңы быуын үҫеп сыҡты. Етмеш төрлө түгел, ете төрлө һөнәр белмәгән йәштәр бихисап.

Иҡтисадтың яңы тармаҡтары башлыса ҙур ҡалаларҙа үҫеш алды: мәҫәлән, илдәге аҡсаның 80 проценты Мәскәүҙә йөрөй. Ауылдарҙа, бәләкәй ҡалаларҙа сервис юҡ кимәлендә. Был унда тыуып үҫкән ҡатын-ҡыҙҙы район үҙәктәренә, ҙур ҡалаларға күсеп китергә мәжбүр итте. Ауыл егеттәренә ҡалаларҙа урын табылманы: бала саҡтан ир ғаиләне тәьмин итергә тейеш, тип тәрбиәләнгән егеттәр баҙап ҡалды - ҡала ерлегендә улар өсөн фатир, эш табыу тик утопик хыял булып сыҡты. Ҡыҙҙарҙың иһә, ауылда йәшәгеһе килмәне. Ошо арҡала хәҙер Рәсәйҙәге халыҡтың 73 проценты ҡалала йәшәй.

Ҡатын-ҡыҙ традицион ир-егеттәрҙеке тип һаналған өлкәләрҙә лә өҫтөнлөк итә башланы: прокуратура, суд, полиция һ.б. Әйтергә кәрәк, был иҡтисад өсөн яҡшы түгел. Ҡатын-ҡыҙ хаким иткән тармаҡтар, нишләптер, тиҙ арала депрессив хәлгә дусар ителде. Мәғарифты ғына алып ҡарағыҙ: уҡытыусылар араһында ир-аттың етешмәүе белем, тәрбиә биреү кимәлен төшөрә.

Глобаль масштабта беҙҙәге хәлдәрҙең сәбәбен түбәндәге сағыштырыу менән дә иҫбатлап була. Бөтә эксперттар Ҡытайҙың үҫеш темптарына хайран ҡалып ҡарай. Уны башлыса Ҡытайҙа барған реформалар менән аңлаталар. Минеңсә, был аналитиктар бер мөһим факторҙы иҫәпкә алырға онота. Бына 30 йыл тирәһе эшләп килгән "бер ғаиләгә бер бала" тигән ҡанун арҡаһында ҡытай ғаиләләрендә башлыса ир балалар табыуға өҫтөнлөк бирҙеләр. Ошоноң арҡаһында бөгөнгө Ҡытайҙа иң ауыр социаль проблема - кәләш таба алмаған буйҙаҡ егеттәр. Уларҙың һаны 40 миллиондан ашып китте. Ошо йәш ир-егеттәр үҙ-ара ярыша-ярыша Ҡытай иҡтисадын үҫтерә лә инде. Рәсәйҙә беҙ кире күренеште күҙәтәбеҙ: ҡатын-ҡыҙҙарҙың һаны ир-егеттәрҙекенән 10 миллионға артығыраҡ. Рәсәйҙең Ҡытай темптарына яҡынлаша алмаясағы көн кеүек асыҡтыр. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың үҙ-ара "ярышы" иҡисадты үҫтермәй шул. Был, беренсенән, эш хаҡының түбән булыуына булышлыҡ итә. Икенсенән, "никах баҙарындағы" үрҙә әйтеп үтелгән кире күренештәргә лә килтерә. 10 миллион "артыҡ" ҡатын-ҡыҙҙың ҙур өлөшөн оло йәштәгеләр тәшкил итһә лә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың башлыса ҡалала йәшәүе улар араһында көслө конкуренция тыуҙыра. Ғаилә төҙөүҙән ваз кисеп, карьераны өҫтөн күргән ҡатын-ҡыҙ был көрәштә бер нәмәнән дә тартынмай. Һуңғы ваҡытта Рәсәйҙе шаңҡытҡан тағы бер күренеш: яҡланған диссертациялар араһында ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы өҫтөнлөк итә. Һәм тағы. Эшендә уңыш ҡаҙанған, аҡсалы, фатирлы, машиналы ҡатын-ҡыҙға үҙенән йәшерәк егетте ҡаратып алыуы, бер яҡтан, әллә ни ҙур проблема түгел - бала саҡтан инфантиль булып үҫкән егет өсөн был никах киң ишектәр аса, икенсе яҡтан, ул "ырыҫлы" ҡатын-ҡыҙға кәрәкле антураж булып тора. Ә тәрбиәле, баҫалҡы ауыл ҡыҙҙары тиҫтерҙәре араһындағы тағы бер "кейәүҙе" юғалта.

Ғаилә башлығы булыу өсөн ир-аттың эш хаҡы ҡатыныныҡына ҡарағанда кәм тигәндә 70-80 процентҡа күберәк булырға тейеш. Бөгөн былдай эш урыны табыуы еңелдән түгел. Шунлыҡтан да инде, күп егеттәр буласаҡ ҡатынының елкәһендә ҡалмаҫ өсөн буйҙаҡ ҡалыуҙы хуп күрә. Шул уҡ ваҡытта улар араһында ҡатын-ҡыҙ талаптарына яраҡлашҡандары ла табыла башланы: эскелек, тәмәке менән мауыҡмай, тәрбиәле булырға тырышҡан ир-егеттәр күҙгә күренеп артты. Бер танышым, үҙенән оло ҡатындарға өйләнгән бер туған өс егетте беләм, тип һөйләгәйне. Уларҙы әсәләре шулай, йәше мөһим түгел, йәшәргә торлағы, йөрөргә машинаһы булһа, ярай, тип тәрбиәләгән икән.

Марксизм классиктары әйтеп ҡалдырған ауыл менән ҡала, физик һәм аҡыл хеҙмәте араһындағы антагонизмды яңы капитализм тағы ла нығыраҡ ҡырҡыулаштырҙы: ул енестәр араһына килеп ҡыҫылды. Ауылда буйҙаҡ егеттәр, ҡалала ҡарт ҡыҙҙар ғүмерлеккә ғаилә бәхетенән мәхрүм булып ҡала. Әммә ғаилә ҡороу Хоҙай тарафынан ҡушылған ғәмәл, бер кем дә яңғыҙ йәшәй алмай һәм йәшәргә тейеш түгел! Ә гәзит уҡыусылар был хаҡта ни уйлай, әйҙәгеҙ, фекер алышайыҡ!

**Илдар ҒӘБИТОВ,**
**иҡтисад фәндәре кандидаты.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ "Башҡортостан Республикаһының дәүләт органдары һәм дәүләт учреждениеларының рәсми сайттарында айырым кешеләрҙең һәм уның ғаилә ағзаларының табыштары, сығымдары, мөлкәт һәм мөлкәт сифатындағы йөкләмәләр тураһында мәғлүмәт урынлаштырыу тәртибе һәм ошо мәғлүмәттәрҙе баҫтырыу өсөн киң мәғлүмәт сараларына биреү тураһында положение" БР Президенты Указы менән раҫланды. Был положениеға ярашлы, түрәләрҙең күсемһеҙ милек, транспорт саралары, йыллыҡ табыш тураһында мәғлүмәттәре хеҙмәткәр эшләгән дәүләт структураһының рәсми сайтында ҡуйылырға һәм йыл һайын яңыртылырға тейеш. Билдәләнгән мәғлүмәттәр менән киң мәғлүмәт саралары ла ҡуллана ала.

✔ БР хәрби комиссары Анатолий Балтинский әйтеүенсә, Ҡораллы Көстәр сафын тулыландырғандарҙың 151 гражданы өйләнгән, 94-нең балаһы бар. Көҙөн саҡырылғандарҙың 700-ҙән ашыуы әсәй йәки атай менән генә, ә 112-һе ата-әсәһеҙ тәрбиәләнгән.

✔ РФ Дәүләт Думаһында Башҡортостандан баш ҡала вуздарында белем алыусы студенттар өсөн экскурсия үтте. Осрашыуҙа ҡатнашыусыларҙы "Берҙәм Рәсәй" фракцияһы етәксеһенең беренсе урынбаҫары Вячеслав Тимченко һәм Һаулыҡ һаҡлау буйынса комитет ағзаһы Сәлиә Мырҙабаева ҡотланы. Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаеваның рәхмәт хаттары һәм Ҙур театрға "Аҡҡош күле" балетына билеттар тапшырыу студенттар хәрәкәте активистары өсөн көтөлмәгән матур бүләк булды.

✔ Өфө статистика, мәғлүмәт һәм иҫәпләү техникаһы колледжы республика халҡына урта профессиональ уҡыу йорттарында мәғариф программаларын ғәмәлгә ашырыу һәм квалификациялы эшсе кадрҙары әҙерләү мәсьәләләре буйынса түләүһеҙ юридик ярҙам күрһәтә. Өфө ҡалаһының Киров урамы, 65-се йортта (205, 239,10-сы кабинеттар) һеҙҙе юғары белемле белгестәр ҡабул итәсәк. (347) 228-67-72 телефоны буйынса алдан яҙылырға кәрәк. Ҡабул итеү сәғәттәре көн һайын иртәнге 10-дан 17 сәғәткә тиклем. Шәмбе һәм йәкшәмбе - ял көндәре.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Әгәр ҙә торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр ғаиләнең дөйөм килеменең 20 процентынан артып китә икән, граждандар субсидия алыуға ла документ тапшыра ала.*



*Аһ-Аһ...*

# ИКЕ СӘҒӘТ - АРТҠА,

## бер сәғәт - алға!

**Быйыл Башҡортостан яңы ваҡытҡа күсәсәк, тип көтөлә. Уйланыуынса, ғөмүмән, Рәсәй ҡайтанан ҡышҡы ваҡытҡа күсерелеп, ун сәғәт поясына бүленәсәк. Беҙҙең республика 3-сө поясҡа эләгәсәк һәм беҙҙә ваҡыт айырмаһы Мәскәүҙекенән әлеге кеүек ике түгел, ә бер сәғәт тәшкил итәсәк (Мәскәү ваҡыты+1).**

Тимәк, беҙгә сәғәт уҡтарын бер юлы ике сәғәткә артҡа күсерергә тура килә. Һөҙөмтәлә эшкә барыу өсөн беҙ әлегесә иртәнге 7-лә түгел, ә 9-ҙа торорға тейеш буласаҡбыҙ. Ә инде эштән әлеге кеүек 6-ла түгел, киске 8-ҙә ҡайтып китәбеҙ. Башҡортостан менән бергә яңы ваҡыт поясына Коми, Пермь крайҙары һәм Ырымбур өлкәһе лә инә.

- Беҙ астрономик ваҡытҡа яҡынлашабыҙ, ә ул физиологик параметрҙары буйынса кешегә нығыраҡ тап килә, - ти Башҡотостандан (ЛДПР) Дәүләт Думаһы депутаты Иван Сухарев. - Юғиһә, сәғәт уҡтарын күсереүҙең кешеләргә, айырыуса балалар организмына нисек тәьҫир итеүен бөтәбеҙ ҙә күреп торабыҙ.

Әйткәндәй, "Ваҡыт иҫәпләү тураһында" Федераль законға үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проекты Дәүләт Думаһына уның Һаулыҡ һаҡлау буйынса комитеты рәйесе Сергей Калашников етәкселегендәге 98 депутат тарафынан тәҡдим ителде. Депутаттар яңы ваҡытҡа күсеүҙе ошо йылдың көҙөндә, йәғни 26 октябрь 02 сәғәттә ғәмәлгә ашырыу маҡсатҡа ярашлы булыр, тигән фекерҙә, сөнки Сочи Олимпиадаһы менән бәйле быны яҡын арала башҡарыу мөмкин булмаясаҡ.

БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу комитеты рәйесе урынбаҫары Римма Үтәшева фекеренсә, бындай ҡарарға килеү мәсьәләнең иҡтисади яғын ғына түгел, ә кеше һаулығын хәстәрләү икәнлеген дә онотorға ярамай, сөнки йәйге осор, мәҫәлән, ҡараңғыла тороп эшкә, мәктәпкә, балалар баҡсаһына барырға һәм кис ҡояш байымаҫ борон ятырға тура килә."Мин сәғәтте күсереү яҡлы һәм уны дөрөҫ, тип иҫәпләйем: астрономик ваҡыт буйынса, тәбиғи шарттарҙа йәшәргә тейешбеҙ",-ти депутат.

Ә бына Дәүләт Думаһы был мәсьәлә буйынса ҡасан һәм ниндәй ҡарарға килер, әлегә билдәһеҙ. Унының рәйесе Сергей Нарышкин әйтеүенсә, депутаттар проектты "бик иғтибар менән" өйрәнергә тейеш, сөнки "тема бәхәсле".

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# АДРЕСЛЫ СОЦИАЛЬ ТҮЛӘҮҘӘР...

## кемгә тәғәйен?

**Былтыр коммуналь түләүҙәр күләме артыу сәбәпле, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте тарафынан беренсе тапҡыр граждандарға компенсация түләү тураһында ҡарар ҡабул ителгәйне. Уға ярашлы, тарифтар 12 проценттан күберәккә артҡан осраҡта, түләүҙәр компенсация иҫәбенә кәметелгәйне.**

Былтыр был хеҙмәт Өфө ҡалаһы халҡына уларҙың килеменә, субсидия биреүсе территориаль органдарға мөрәжәғәт итеү-итмәүенә, документтар пакетын тапшырыу-тапшырмауына, милкендә нисә фатир булыуына, коммуналь хеҙмәттәр өсөн бурысы булыу-булмауға ҡарамаҫтан, барыһына ла бирелгәйне. Баш ҡала өсөн компенсация түләүҙәренә дөйөм алғанда 400 миллион һум самаһы (300 миллион һум самаһы - республика бюджетынан, 100 миллион һум тирәһе - ҡала бюджетынан) аҡса бүленде.

1 ғинуарҙан торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн компенсация түләү туҡтатылды. Ләкин халыҡтың ихтыяжын иҫәпкә алып, Башҡортостанда адреслы социаль түләүҙәр индереләсәк - ул граждандарға бары тик үҙҙәре йәшәгән һәм теркәлгән торлаҡ өсөн һәм ғариза нигеҙендә генә биреләсәк.

Уны тәғәйенләү һәм түләү "Халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү республика үҙәге" дәүләт ҡаҙна учреждениеһы тарафынан башҡарыла. Адреслы социаль түләүҙәр граждандарға, улар закон тарафынан торлаҡ бина өсөн һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәренә аҡсалата компенсация йәки субсидия алыуына ҡарамаҫтан, бирелә. Йәғни, әгәр ҙә торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр ғаиләнең дөйөм килеменең 20 процентынан артып китә икән, граждандар субсидия алыуға ла документ тапшыра ала. Был сара халыҡтың аҙ тәьмин ителгән ҡатламының мәнфәғәтен яҡлауға йүнәлтелгән.

Гражданға бирелгән адреслы социаль түләүҙәр ғаиләнең йәки яңғыҙы йәшәгән гражданға торлаҡ бинаһы, коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүгә субсидия бирелгәндә дөйөм килемендә иҫәпкә алына.

**Адреслы социаль түләүҙәргә түбәндәге категория хоҡуҡлы:**

- Ҡуртым килешеүе буйынса торлаҡ бинаһын ҡуртымға алыусылар;
- Торлаҡ йәки торлаҡ-төҙөлөш кооперативы ағзалары;
- Торлаҡ бина (фатирҙар, өйҙәр) милекселәре, әгәр улар ошо биналарҙа теркәлеп, шунда йәшәһәләр.

Түләүҙәр торлаҡ бинаһы һәм коммуналь хеҙмәттәрҙе туләүҙәр буйынса иҫәп асылған гражданға бирелә.

**Адреслы социаль түләүҙәр алыу өсөн нигеҙ:**

- Граждандарҙың коммуналь хеҙмәттәр (һыуыҡ, йылы һыу, йылылыҡ менән тәьмин итеү, һыу үткәргес, электр энергияһы, газ) өсөн дөйөм түләүҙәренең үҫеше элекке хаҡтар менән сағыштырып ҡарағанда 12 проценттан артһа;
- Граждандарҙың торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн бурысы булмаһа.

**Адреслы социаль түләүҙәрҙе алыу өсөн түбәндәге документтар кәрәк:**

- Адреслы социаль түләүҙәрҙе алыу өсөн ғариза һәм шәхси мәғлүмәттәрҙе эшкәртеүгә ризалыҡ;
- РФ гражданы паспорты (әгәр күсермәһе нотариаль раҫланмаһа, төп нөсхәһен күрһәтергә кәрәк буласаҡ);
- Ғариза биреүсенең даими йәшәү урынында теркәлеүен һәм торлаҡ бина менән файҙаланыуға хоҡуғын раҫлаусы документтарҙың күсермәһе (әгәр күсермәләр нотариаль раҫланмаһа, төп нөсхәләрен күрһәтергә кәрәк);
- Иҫәп йәки тулыландырыу суммаһы һәм вкладтың ғәмәлдә булыу ваҡытының сиге билдәләнмәгән банк картаһының иҫәбе асылыу тураһында килешеү күсермәһе;
- Адреслы социаль түләүҙәрҙе алыу тураһында ғариза бирер алдынан торлаҡ йәки коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр тураһында мәғлүмәт булған документтарҙың күсермәһе.

**Ғаризаны ҡабул итмәү өсөн түбәндәге сәбәптәр нигеҙ булып тора:**

- Документтар тулы күләмдә булмаһа йәки бөтөнләй бирелмәһә;
- Документтар адреслы социаль түләүҙәр алыуға хоҡуҡты билдәләүсе шарттарға тура килмәһә;
- Ғариза 2014 йылдың 30 июненән һуң бирелһә (ғаризаны 2014 йылдың ғинуарынан 2014 йылдың 30 июненә тиклем тапшырырға кәрәк).

**Адреслы социаль түләүҙәрҙе алыу өсөн түбәндәге ойошмаларға мөрәжәғәт итергә кәрәк:**

- "Халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү республика үҙәге" дәүләт ҡаҙна учреждениеһының структура бүлексәләренә;
- Өфө ҡалаһының Берҙәм иҫәп-касса үҙәге муниципаль унитар предприятиеһы бүлексәләренә;
- "Дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр күрһәтеүҙең күп функциялы үҙәге" Республика дәүләт автономиялы учреждениеһы бүлексәләренә.

**Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика идаралығы.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ОТОШЛО БӘЙЛӘНЕШ

Республиканың предприятиелары һәм ойошмалары хеҙмәткәрҙәренә пенсияны ваҡытында тәғәйенләү маҡсатында Пенсия фонды идаралыҡтары районларҙа һәм ҡалаларҙа эш биреүселәр менән электрон хеҙмәттәшлек итеү хаҡында килешеүҙәр төҙөй.

Был килешеүҙәргә ярашлы, кадрҙар бүлеге хеҙмәткәрҙәре яҡындағы 12 ай эсендә пенсияға сығырға тейешле кешеләрҙең документтарының электрон өлгөләрен ебәрергә тейеш. Мәғлүмәттәр һаҡҡа алынған бәйләнеш каналдары буйынса ебәрелә, бында буласаҡ пенсионерҙың ҡатнашлығы кәрәкмәй. Республиканың иң эре 1600 эш биреүсеһе менән ошондай килешеүгә ҡул ҡуйылған да инде.

Пенсия фондына документтарҙы алдан туплап ебәреү уларҙың тулылығын, мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгөн тәьмин итә. Буласаҡ пенсионерҙар кәрәкле документтар артынан йүгермәләп йөрөмәйәсәк. Бынан тыш, Пенсия фонды идаралыҡтары менән республиканың архив учреждениелары араһында ла өсөнсө йыл инде электрон документ әйләнеше эшләп килә. Стажды һәм башҡа мәғлүмәттәрҙе раҫлау кәрәклеге тыуғанда, Пенсия фонды граждандарҙың йомоштарын архив учреждениеларына юллай ала.

Рәсәй Пенсия фондының БР буйынса идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, яңы электрон документ әйләнеше эш биреүселәрҙең, кадрҙар хеҙмәте белгестәренең һәм буласаҡ пенсионерҙарҙың эш ваҡытын сарыф итмәҫкә мөмкинлек бирә. Хаҡлы ялға сығыусыларға пенсия йәше тулыуға бер ай ҡалғас, паспорты, мотлаҡ пенсия страховкаһы таныҡлығы, хеҙмәт кенәгәһе һәм ғариза менән Пенсия фонды идаралығына мөрәжәғәт итергә генә ҡала.

**РФ Пенсия фонды БР буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәрҙе хәҙер Күп функциялы үҙәк аша алырға була. Өфөлә бындай ике үҙәк эшләй: Яңы күпер урамы, 8-се йорт ("Сәнғәт училищеһы" туҡталышы) һәм Интернационал урамы, 113-сө йорт ("Тыныслыҡ урамы" туҡталышы). Үҙәктәр иртәнге 8-ҙән киске 20 сәғәткә тиклем тәнәфесһеҙ эшләй, йәкшәмбе - ял көнө. Күрһәтелгән хеҙмәттәр тураһында аныҡыраҡ мәғлүмәт Өфө ҡала округы хакимиәте сайтында (www.ufacity.info) һәм Үҙәктең үҙенең сайтында (www.mfcrb.ru) бар. Белешмәләр өсөн телефондар: +7(347) 246-55-33; 246-55-44.

✓2014 йылдың февраленән нотариус раҫлаған күсемһеҙ милек килешеүҙәренең законлылығын Росреестр тикшермәйәсәк, йәғни бөтә яуаплылыҡ нотариустар иңенә ятасаҡ. Был, үҙ сиратында, дәүләт теркәүе срогын кәметеүгә булышлыҡ итә. Нотариус раҫлаған күсемһеҙ милек килешеүҙәре 5 эш көнө эсендә дәүләт теркәүе үтәсәк. Раҫланған күсемһеҙ милек килешеүен һәм башҡа тейешле документтарҙы нотариус һәм уның ярҙамсыһы милек хужалары исеменән Росреестрға тапшырырға һәм әҙер документтарҙы алырға хоҡуҡлы.

✓Ишембайҙа ирҙәр һәм ҡатындар араһында халыҡ-ара шашка буйынса Башҡортостан Республикаһының асыҡ чемпионаты уҙҙы. Ике классик һәм "йәшен тиҙлегендәй" программаларҙа дүрт комплект миҙал уйналды. Ҡатнашыусылар араһында Рәсәй йыйылмаһынан 11 кеше, шулай уҡ Урал аръяғынан дебютанттар ҙа булды.

✓Дәүләт Думаһы берҙәм тауыш биреү көнөн ноябргә күсереү тураһында индерелгән закон проектын кире ҡаҡты. Берҙәм тауыш биреү көнө алдан билдәләнгән сентябрҙең икенсе йәкшәмбеһе булып ҡала. Тауыш биреү көнөн күсереү тураһындағы башланғысты "Ғәҙел Рәсәй" депутаттары тәҡдим иткәйне.

✓Яңы йылдан алып өҫтәмә хаҡҡа һалым түләүселәрҙең бөтәһенән дә һалым буйынса декларацияларҙы тик электрон төрҙә - документтарҙың электрон әйләнеше операторҙары аша биреүҙе талап итәләр. Яңылыҡ, хеҙмәткәрҙәр иҫәбенә ҡарамаҫтан, өҫтәмә хаҡҡа һалым түләүселәрҙең барыһына ла ҡағыла, тип хәбәр итә Федераль һалым хеҙмәтенең БР буйынса идаралығы.

*ИҠТИСАД ӘЛИФБАҺЫ*

# КРЕДИТ АЛЫР АЛДЫНАН...

## түләреңде ныҡлап уйла!

**Бөгөнгө көндә банк алдында бурысы, йәғни кредиты булмаған кешене осратыуы ауыр. Ҡайһы берәүҙәр иңендә икешәр, өсәр һәм хатта дүрт-биш кредит ауыр йөк булып эленеп тора. Кемдер былдай һаҙлыҡҡа сараһыҙлыҡтан барып батһа, икенселәр иһә аңлы рәүештә, үҙенең самаһыҙ ихтыяжын ҡәнәғәтләндерәү өсөн (яңы машина, кәрәҙле телефондың "текә"рәген һатып алыу, сит илдәрҙә ял итеү һәм башҡа осраҡтар) кредит тип аталыусы тоҙаҡҡа барып эләгә.**



Йәшәү шарттарын яҡшыртыу, балаларға белем биреү, һаулыҡҡа хәүеф янағанда һәм башҡа ошондай осраҡтарҙа банктан аҡса алыу үҙен аҡлай, әлбиттә, ләкин күптәрҙең еңел аҡса башын әйләндерә һәм уларҙың үҙҙәрен генә түгел, ә яҡындарын да оло хәүеф аҫтына ҡуя, сөнки бурысты кире ҡайтарғанда ғаилә бюджетының күп өлөшө кредит өсөн түләүгә китә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, халыҡтың кредит менән мауығыуы кәмемәй. Мәҫәлән, уҙған йылда ғына рәсәйлеләрҙең банк алдындағы бурысы 25 процентҡа артып, 370 миллиард һум тәшкил иткән. Был һандың юғары темптар менән үҫеүенә банктарҙың кредит таратыуға ҡарата булған еңел ҡарашы ла булышлыҡ итмәй ҡалмай. Кредит һорап мөрәжәғәт итеүсенең бер-нисә кредит түләүен иҫәпкә алмайынса, ул һораған сумманы тотторон сығарыу банктар өсөн дә өҫтәмә ауырлыҡтар тыуҙыра, ләкин был уларҙы кредит таратыуҙан туҡтатмай. Күрһәң, зыянға ҡарағанда файҙаһы күберәктер.

Кредит баҙарының үтә лә ҡыҙып китеүе хаҡында барыһы ла хәбәрҙар, тик уны ни рәүешле "һыуытыу" юлын ғына әйтеүселәр һирәк. Шундайҙарҙың береһе - Рәсәй Финанстар министрлығы. Бының өсөн улар "Кредит тарихтары тураһында"ғы законға үҙгәрештәр индерергә тәҡдим итә. Уға ярашлы, законда граждандың кредиттары буйынса үҙ йөкләмәләрен үтәүүтәмәүе тураһындағы мәғлүмәткә ҡушып, уның шулай уҡ автомобиль штрафтары, коммуналь хеҙмәттәр һәм кәрәҙле телефон бәйләнеше өсөн булған бурыстары ла күрһәтеләсәк. Үҙгәрештәр индерелгән осраҡта, былдай мәғлүмәттәр кешенең ризалығынан тыш күрһәтеләсәк. Бының өсөн граждандың теге йәки был ойошма алдындағы бурысы хаҡында үҙ көсөнә ингән суд ҡарарының булыуы ғына шарт.

Финанс өлкәһендә эшләүсе эксперттарҙың былдай үҙгәрештәргә ҡарата фекере төрлөсә. Берәүҙәр был юл кредит алыусыны үҙенең финанс йөкләмәләренә ҡарата тәртиплерәк булырға, ә банктарға "сифатлыраҡ" клиенттар һайларға ярҙам итәсәк, тигән ышаныста булһа, икенселәр иһә был аҙымды "уйлап етеләңкерәмәгән", тип белдерә. "Бөтә нәмәне лә һәр ваҡыт үҙ ваҡытында ғына эшләүе мөмкин түгел. Бында кешелек факторы, техник хаталар һәм башҡа осраҡтарҙың булыу мөмкинлеген күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Әгәр ҙә граждандың ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында (һәм был сәбәптәрҙең барлыҡҡа килеүендә уның ғәйебе булмаҫҡа ла мөмкин) бурысы барлыҡҡа килһә, уға кредит биреүҙән баш тартасаҡтар. Шулай уҡ уның кредит тарихы ла боҙоласаҡ. Граждандарҙың хоҡуғын сикләү - уйлап еткерелмәгән аҙым", - тигән ышаныста аналитик Юрий Прокудин.

Нисек кенә булмаһын, былдай үҙгәрештәр индереүҙе күҙаллаған документ хөкүмәттең закон проекттары эшмәкәрлеге комиссияһы тарафынан хуплау алған да инде. Яҡын арала ул хөкүмәт ултырышында ҡаралып, Дәүләт Думаһына ебәреләсәк. Тимәк, депутаттарҙың был хаҡта ни әйтерен көтөргә генә ҡала.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Бөгөнгө көндә рәсәйлеләрҙең күпселек эш хаҡы кредит ҡаплау өсөн китә. Ләкин был да етмәй һәм бер кредитын ҡаплау өсөн улар икенсеһен, өсөнсөһөн һәм артабанғыларын ала. Ҡайһы бер банктарҙа кире ҡайтарылмаған кредиттар һаны әлеге ваҡытта 40 проценттан да күберәкте тәшкил итә. Был, эксперттар фекеренсә, финанс көрсөккә илтеүсе тура юл. Ләкин 2008 йылдағы финанс көрсөк тәү сиратта төрлө компания һәм предприятиеларҙы "аяктан йығып", һуңынан ябай хеҙмәткәрҙәргә барып етһә, яңы көрсөк була ҡалһа, рәсәйлеләр үҙ бурыстары менән күҙмә-күҙ ҡарашып, яңғыҙ тороп ҡаласаҡ. Ә бының ниндәй ауыр эҙемтәләргә килтерәсәген аңлауы ҡыйын түгел. Шуға күрә, теге йәки был мәсьәләне кредит ярҙамында хәл итеүҙе тәү сиратҡа ҡуйып түгел, ә иң һуңғы сиктә генә ҡарарға өйрәнергә ваҡыттыр.**

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА
әҙерләне.

*ҺОРАУ - ЯУАП*

### ОПЕКУНЛЫҠТАН СИТЛӘТЕҮ

**Миңә 76 йәш, шөкөр, һаулығыма зарланмайым, ләкин өлкән йәштә булыуым сәбәпле, мине балиғ булмаған ейәнемә опекунлыктан мәхрүм итеүҙәре бар, тип ишеттем. Ҡыҙым балаһын ҡарар хәлдә түгел, сирле булғанлыктан, үҙен ҡарарға кеше кәрәк. Миңә ни эшләргә?**

- "Опека һәм попечителлек тураһында"ғы федераль закон нигеҙендә опекунлыҡ һәм попечителлектән түбәндәге осраҡтарҙа мәхрүм итеү ҡаралған:
- опекун үҙ бурыстарына яуапһыҙ ҡараһа;
- опекунлыҡҡа алынған баланың хоҡуҡтары һәм законлы мәнфәғәттәре боҙолһа;
- опекунлыҡ аҫтыртын маҡсаттар менән эшләнһә;
- тәрбиәгә алынған бала ҡараулһыҙ һәм ярҙамһыҙ тороп ҡалдырылһа;
- яуаплы кеше тарафынан опекунлыҡҡа алынған баланың милкен һаҡлау ҡағыҙәләре боҙолһа һәм был милек законһыҙ рәүештә файҙаланылһа.

Күреүегеҙсә, законда өлкән йәштәгеләрҙе опекунлыҡтан ситләтеү хаҡында бер һүҙ ҙә юҡ. Йәшегеҙ һеҙгә был бурысты үтәргә ҡамасаулыҡ итмәй икән, хафаланмағыҙ, ейәнегеҙҙе тәрбиәләгеҙ .

### ӨҪТӨНЛӨК ҺЕҘҘЕҢ ЯҠТА ТҮГЕЛ

**Ҡыҙым дәүләттеке булмаған укыу йортона инергә йыйына, түләрлек аҡса йыйғанбыҙ, тик беҙҙе шуныһы борсой: килешеүҙә укыуға хаҡтың 25 процентҡа тиклем күтәрелеү ихтималлығы хаҡында әйтелә. Иҫәпләп ҡараһаң, укыу өсөн хаҡты ике тапҡырға күберәк түләргә тейеш булып сығабыҙ. Был законлымы?**

- Килешеү проекттарын, ғәҙәттә, укыу йорттары үҙҙәре әҙерләй һәм икенсе яҡҡа ҡул ҡуйыу өсөн тәҡдим итә. Шунлыҡтан, күп осраҡта был килешеүҙәрҙә икенсе яҡ менән мөнәсәбәттәрҙең бөтә шарттары ла тулы сағылыш таппай. Йә ул, әлеге кеүек, ҡул ҡуйыусы өсөн отошһоҙ шарттарҙа була. Былдай осраҡта ике яҡ та шарттарҙы үҙгәртеү йә булмаһа һәр ике яҡтың да мәнфәғәттәрен күҙәтеү маҡсатында башҡа төрлө шарттар өҫтәп яҙыу хаҡында мәсьәлә ҡуя ала. Ләкин һеҙҙең осраҡта вуз килешеүҙе үҙгәртергә риза булырмы - быныһы икенсе мәсьәлә.

Түләү мәсьәләһендә бөтөн нескәлектәр ҙә бик мөһим һәм, әгәр ҙә укыу йорто хаҡ артыу ихтималлығы хаҡында иҫкәртә икән, тимәк, ул был пунктты алып ташлай алмай. Ә һеҙҙең ҡул ҡуймаҫҡа һәм икенсе укыу йортон һайларға тулы хаҡығыҙ бар.

### ҺАЛЫМ АЙЫРМАҺЫ - ҺАЛЫМ ТҮЛӘҮСЕГӘ

**Һуңғы йылдарҙа хаҡлы ялға сыҡҡан һәм фатир һатып алған пенсионерҙарға милек айырмаһы түләнә, тип ишеткәйнем. Ә бына дауаланыу һәм дарыуҙар һатып алыуға киткән сығымдар өсөн һалым айырмаһын ҡайтарып буламы?**

- Үкенескә күрә, былдай мөмкинлек ҡаралмаған. 13 процент ставка буйынса һалым түләмәүселәр, ә улар - пенсионерҙар, йорт хужабикәләре, студенттар һәм башҡа төр йыйылмдар түләүсе эшкыуарҙар - айырма ала алмай. Был осраҡта бит айырма - ул түләнгән һалымды ҡайтарыу, ә һалым түләмәгәс, тимәк, аҡса ла юҡ (РФ Һалым кодексының 219-сы статьяһы). Ә шулай ҙа яҡын туғандарығыҙ (йәмәғәтегеҙ, балаларығыҙ) һеҙҙең өсөн һалым айырмаһын ҡайтара ала, тик бының өсөн бөтөн чектар улар исеменә яҙылырға тейеш.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡорсаңғы, ҡысытма

❖ Ҡорсаңғы менән зарарланған малдарҙы ябай көкөрт майы (серная мазь) менән дауалайҙар. Ул дарыуханаларҙа һатыла. Мин был дауаны үҙемдә һынап ҡараным. Көкөрт майын тәнгәлөккә тәнгә һөрткәс, парниктар өсөн ҡулланылған полиэтилен менән төрөнөп, юрған ябынып яттым. Ошо дауаны өс төн дауамында ҡабатлап, был сирҙе еңә алдым. Әммә быны ҡабатларға теләүселәрҙе иҫкәртергә теләйем: башта тиреңеҙ был майға булған реакцияһын тикшереп ҡарағыҙ, әгәр ҙә ниндәйҙер ялҡынһыныу барлыҡҡа килһә, дауанан баш тартығыҙ.

❖ Боронғо дауалаусылар ҡорсаңғынан шундай кәңәш бирә: кесерткән, тоҙ, йөмортҡа һарыһы алып болғатырға һәм көнөнә 3 тапҡыр һөртөргә.

❖ 50 грамм артыш ботаҡтары һәм емештәренә бер биҙрә ҡайнар һыу ҡойорға. Ҡылауыр (золотуха) һәм ҡорсаңғы ваҡытында ҡулланырға.

❖ Ҡутырҙы һыйыр майына буталған дарыу менән дауалайҙар.

❖ Яндырылған һарымһаҡ көлөн бал менән бутарға һәм уны бит, тән тиреһенә һөртөргә. Был дауа тәндән ҡутырҙы һәм биттәге һитҡыларҙы бөтөрә.

❖ Ошо уҡ компоненттарға һыйыр майы ла ҡушып, ҡутыр һәм ҡысыныуҙы дауалайҙар.

### Гипотиреоз

❖ Бал һәм лимон. Урта ҙурлыҡтағы 1 лимонды ҡабығы менән ит турағыстан үткәрергә, 1 стакан бал менән бутарға. Оҙайлы ваҡыт көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

❖ Әстерхан сәтләүеге һәм бал. 3-4 әстерхан сәтләүеген 1 ҡалаҡ бал менән бутарға. Был - бер тапҡыр ҡабул итә торған порция. Уны иртәнсәк ас ҡарынға ашарға. Дауаны шулай уҡ оҙайлы ваҡыт дауам итергә.

Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Һыу зәхмәтен имләү

**Һыу тотоу.** "Битеңде йыуһаң да сәсеңде йолҡоп һал", - тигәндәр элек. Юғиһә, һыу тота икән.

*Мине тотма, шуны тот,*
*Шуны аша, шуны эс,*
*Шуның менән ғүмер ит,* - тип һамаҡлап һалырға ҡушалар. "Шишмә һыуына таңда барырға ярамай, унық һыуы тотоусан була", - тип тә әйтәләр ине.

**Һыуҙан ҡағылғанда таш име.** "Мине тотоп, баҫмаҡтан һыуға ырғыттылар. Ҡурҡып, аҡырып килеп сыҡтым. Өйгә ҡайтып кергәнсе аяк-ҡулдар тыңламай башланы. Имсе әбей һыуҙан ҡағылған, тип әйтте һәм ошолай имләне. Ташты ҡыҙҙырҙы, шуның быуына ултыртты. Шунан шул ташты алып барып күмдерҙе. Шулай итеп, һыуҙан ҡағылған сирҙе таш менән ергә ҡыуҙырҙы", - тип һөйләне Ҡыйғы районынан Г. Вәлиева.

**Һыуыҡ һыу име.** "Һыуыҡ тотоу, тип, йылан ҡауын килтереп һалалар. Мине һыуыҡ тотҡан ине ул йылда, һыуыҡ тотһа, ҡаты итеп ҡалтыраһ. Йылан ҡауын ҡайҙан тапҡандарҙыр, ҡабырғама һалғандар. Ысын йылан имеш, тип ҡысҡырып, һикереп торҙом. Шунан һыуыҡ тотмаҫ булды. Ныҡ ҡурҡытырға кәрәк икән. Һыуыҡ тотоп ҡалтыранған кешегә ҡарлы-боҙло һыу һибә торғайнылар", - тип һөйләне Шәкәр ауылынан (Свердловск өлкәһе) Р.Мәхмүтова.

**Ҡурҡытыу име.** Ҡурҡытып та им итәләр. Бер әйберемде алғанһың, урлағанһың, тип әйтеп, илатҡансы ҡурҡытаһың.

**Боҙ менән зәхмәтте ебәреү.** Кариҙел яҡтарында ауырыу-сырхауҙы ҡыуам тип, боҙ киткәндә боҙға тәңкә ташлайҙар. Ен-зәхмәт менән ауырығандар: "Ауырыуҙы алып кит!" - тип боҙға ҡурсаҡ ултыртып, ағыҙып ебәрәләр.

Боҙ менән ағыҙып, зәхмәтте генә түгел, хәүефхәтәрҙе лә ебәргәндәр.

*Ер инәһе Ерән ат,*
*Һыу инәһе Һылыу ҡыҙ,*
*Минә ашама, мине эсмә,*
*Минән ялыҡ, һинән һаулыҡ,* - тип әйтеп, һыуҙы сайпылтмай ғына, аҡрын ғына һалырға ҡушалар.

**Ергә һалыу.** "Тыҡрыҡҡа сығып баҫҡайным, аяғым ауырта башланы. Аралыҡ (тыҡрыҡ) урындар зәхмәтле була. Шуны ергә һалып бөтөрҙөм. Һалғанда "Бисмилла" тип әйтергә, артыңа әйләнеп ҡарарға ярамай. Сир кире үҙеңә һуғыла, тиҙәр.

Тараҡан, себен, сәс, тырнаҡ, һауыт йыуа торған йыуғыс алып, ете төрлөгә тултырып, ҡояш байығас, ҡараңғы төшөп етмәҫ борон алып китәһең. Итәгеңде күтәреп, ошо әйберҙәрҙе өс ҡат билдән әйләндерергә кәрәк. Шунан бер ергә күмеп ҡуяһың йә юл сатына һалырға ҡушалар ине. Дүрт юл сатына йә өс юл сатына һалып ҡуйырға кәрәк", - тип яҙҙырҙы Шөкөрҙән (Свердловск өлкәһе) К.Фәйзрахманова.

**Йығылғанға им.** "Һыу буйында йығылып, мин бик оҙаҡ сирләнем, - тип һөйләне Үрмәкәйҙән М.Ғәлимйәнова. - Бер им иҫемә төшөп ҡалды. Ҡояш байығас, аҡшам ваҡытында бер тусҡаҡ һыу алдым да "Бисмилла" әйтеп, бер генә күмер һалдым. Шуны һулаҡайға табан өс мәртәбә әйләндерҙем дә, кеше менән һөйләшмәй генә бер соҡорға сығарып түктем. Өс көн шулай әмәлләгәс, арыуландым кеүек. Соҡор эҙләп йөрөмәһәң, һыуҙы ҡапҡаның арт яғында, аса торған кендеге бар бит, шунда һалалар, һалғанда ошо әпсенде һамаҡлайҙар:

*Ерҙән килһәң, ергә кит,*
*Һыуҙан килһәң, һыуға кит.*
*Ҡайҙан килһәң, шунда кит.*
*Ерҙән тейенгәнгә әпсен.*
*Ер анаһы ер булыр,*
*Һыу анаһы һыу булыр.*
*Мине ашама, мине эсмә,*
*Минән бүләк - ялыҡ, һинән - һаулыҡ,*
*Шуны аша, шуны эс,*
- тип әйтеп, ҡоро көн (шаршамбы) ҡояш байығас, ҡапҡа орсоғона һыу ҡоялар.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

КИТАБЕННАС

**Былтыр декабрҙә "Башҡортостан энциклопедияһы" ғилми-нәшриәт комплексы тарафынан әҙерләнгән "Баймаҡ энциклопедияһы" баҫылып сыҡты. Йүнәлеше буйынса ғилми-популяр был баҫма Баймаҡ районы хакимиәте (башлығы - Илшат Ситдыҡов) заказы буйынса әҙерләнде һәм Баймаҡ районының социаль-иҡтисади үҫеше мәрхәмәтлек фонды (етәксеһе - Рәжәп Мырҙабаев) ярҙамында нәшер ителде. Энциклопедия, тигәндә беҙ, ғәҙәттә, тулы кимәлдә өйрәнелеп, системаға һалып килтерелгән һүҙлекте йә белешмәне күҙ алдына килтерәбеҙ. Ошо күҙлектән ҡарағанда, "Баймаҡ энциклопедияһы" атамаһында әйтеп кителгән төбәк хаҡында тулы мәғлүмәтте һынландыра алама? Баҫма Баймаҡ ере, уның тәбиғәте, кешеләре хаҡындағы быға тиклем донъя күргән китаптарҙан, һүҙлектәрҙән, белешмәләрҙән, ғөмүмән, башҡа энциклопедик китаптарҙан ни яғы менән айырыла һәм уның төп үҙенсәлеге нимәлә? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуаптарҙы "Башҡортостан энциклопедияһы" ғилми-нәшриәт комплексы махсус проекттар бүлеге мөдире, "Баймаҡ энциклопедияһы" эш төркөмө етәксеһе Гөлдәр Ишкинина менән әңгәмәлә табырһығыҙ.**

# "БАЙМАҠ ЭНЦИКЛОПЕДИЯҺЫ" - бер район тарихы ғына түгел



### Төп принцибы

Әгәр ҙә, Баймаҡ, тигәндә хәҙерге Баймаҡ районы биләмәһен, уның административ территорияһын ғына күҙ уңында тотһаҡ, был атаманың төшөнсәһен үтә тарайтыр инек. Ә инде Баймаҡты халҡыбыҙҙың, ошо ерҙә төйәк иткән бөрйән ырыуының меңәр йыллыҡ тарихы юҫығында ҡараһаҡ, был төбәктең мәғәнәүи йөкмәткеһе тағы ла киңәйә һәм Баймаҡ районы биләмәһенән ситкә сыға. Ғалимдарҙың гаплатөркөмдәр буйынса һуңғы сенсацион асышы мәғлүмәттәре раҫлауынса, бынан ун биш мең йыл самаһы элек ошо төбәктә йәшәүсе бөрйән ырыуы вәкилдәренең иң күбеһе хәҙерге ваҡытта Баймаҡ районында йәшәй. "Урал батыр" эпосының нәҡ ошо ерлектә һаҡланыуы һәм яҙып алыныуы ла күп нәмә тураһында һөйләй. Былар барыһы ла Уралтауҙа формалашҡан башҡорт милләтенең ядроһында бөрйән ырыуының да булыуын раҫлай. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостан автономияһы ла ошо ерлектә иғлан ителгән. Тимәк, ошоларҙан сығып, милләтебеҙҙең формалашыуында, республикабыҙҙың барлыҡҡа килеүендә Баймаҡ ерлеге үҙәк урынды биләүе хаҡында һүҙ йөрөтөргә була. Быны ошондай тарихи ерлек беҙҙең өсөн "Баймаҡ энциклопедияһы"н төҙөүҙәге төп принципты тәшкил итте лә инде. Йәғни был энциклопедияны милләтебеҙ, республикабыҙ, Рәсәй, Евразия, бөтөн донъя ареалынан тыш күҙ алдына килтереп булмаҫ ине. Шуға күрә ете томлыҡ "Башҡорт энциклопедияһы" беҙҙең эштең төп нигеҙе булды. Уларҙы әҙерләгәндә ҡулланылған критерийҙарҙы, методик ҡулланмаларҙы беҙ "Баймаҡ энциклопедияһы"на яраштырҙыҡ.

### Уртаҡ эшкә әүерелде

Быға тиклем Баймаҡ хаҡында байтаҡ китаптар донъя күргән. Уларҙы ниндәйҙер кимәлдә энциклопедияға тап килтереп эшләргә тырышҡандар. Һүҙ ҙә юҡ, авторҙар ҙур эш башҡарған. Әммә уларҙы энциклопедияға тартым баҫмалар тип кенә әйтергә була. Әлбиттә, беҙ ул китаптарҙы үҙ эшебеҙҙә файҙаландыҡ. Архивтар менән тура бәйләнештә булдыҡ, предприятиеларҙың кадр бүлектәрен эшкә ектек. Район китапханалар селтәре директоры Луиза Дәүләтшина, район архивы мөдире Фатиха Харрасова, район ЗАГС-ы мөдире Зөлфиә Әминева, тыуған яҡты өйрәнеү музейы директоры Наилә Ғәлина, район хакимиәте идаралыҡтары һәм бүлектәре, уҡытыусылары, ауыл хакимиәттәре башлыҡтары һәм хеҙмәткәрҙәре мәғлүмәт туплауға ҙур өлөш индерҙе. Районның һәр бер ауыл хакимиәтендә, мәктәбендә, музейҙарында, китапханаларында, предприятиеларында мәғлүмәт туплау буйынса яуаплы кешеләр билдәләнде. Урындағы тыуған яҡты өйрәнеүселәр Әмир Сәйғәфәров, Рамаҙан Үтәғолов, Азамат Тажетдинов һәм башҡалар беҙгә ҙур ярҙам күрһәтте. Беҙ уларҙың район, ауылдар тарихына, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, Бөйөк Ватан һуғышы һәм башҡа темаларға арналған китаптарында тупланған ҡиммәтле мәғлүмәттәргә нигеҙләндек. Өфөлә йәшәгән яҡташтар ҙа үҙ өлөшөн индермәй ҡалманы. Ҡыҫҡаһы, район хакимиәте башлығы Илшат Ситдыҡов тырышлығы менән район энциклопедияһын яҙыу Баймаҡ халҡының уртаҡ эшенә әүерелде. Энциклопедия төү сиратта - мәғлүмәт сығанағы. Уға мөрәжәғәт итеүсе үҙен ҡыҙыҡһындырған шәхес, тарихи ваҡиға, ойошма тураһында ҡыҫҡа, аныҡ, әммә бөтә йәһәттән дә тулы, документаль сығанаҡтар менән раҫланған мәғлүмәт табырға тейеш. Шуға күрә беҙ Башҡортостан Республикаһының Үҙәк дәүләт тарихи архивы, Ырымбур өлкәһенең тарихи архивынан алынған мәғлүмәттәргә лә таяндыҡ.

### Ҡыҫҡаса йөкмәткеһе

Башҡортостан автономияһы Баймаҡ ерлегендә барлыҡҡа килгәс, беҙ бер нисек тә Әхмәтзәки Вәлиди, Шәйехзада Бабич кеүек шәхестәрҙе урап үтә алмайбыҙ. Ғөмүмән, ошо район ерлегенә бәйле барлыҡ тарихи ваҡиғалар, ихтилалдар, инҡилап осоро сағыла баҫмала. Унда Баймаҡта йәшәп киткән, әммә төбәктең, республиканың үҫешенә ҙур өлөш индергән шәхестәр - Һәҙиә Дәүләтшина, Ғәбәй Дәүләтшин, Зәйнәб Биишева һәм башҡалар тураһындағы мәғлүмәттәр ҙә бар.

Баймаҡ районы территорияһында файҙалы ҡаҙылма ятҡылыҡтары бик күп. Был темаға яҙыусы белгестәрҙе үҙ эшебеҙгә йәлеп иттек. Районда элек эшләгән мәҙрәсәләрҙе лә онотманыҡ. Ауылдарға килгәндә, китапта хәҙер йәшәп ятҡан ауылдарҙан тыш, бөткән ауылдар хаҡында ла мәғлүмәт бирҙек. Тарихи-территориаль берәмектәр, өйәҙҙәр, губерналар, олоҫтар, кантонлыҡтар хаҡында ла мәғлүмәт табырға була. Шулай уҡ Баймаҡ ерлегенә бәйле тыуған ун бер башҡорт халыҡ йыры, уларҙың тарихтары, ноталары ла китап биттәренә урынлаштырылды. "Урал батыр"эпосы, Ҡәнифә юлы ла китаптың лайыҡлы урынын биләй.

Колхоз-совхоздарҙы айырым осор итеп күрһәттек. Крәҫтиән-фермер хужалыҡтары, малсылыҡ, игенселек, йылҡысылыҡ буйынса айырым мәҡәләләр бар. Мәктәптәрҙең ҡайһы берәүҙәре ябылһа ла, беҙ уларҙы ла тарихҡа индереп ҡалдырырға тырыштыҡ. Райондағы спорт үҫешен дә сағылдырҙыҡ. Энциклопедияла "Ҡыҙыл китап"ҡа ингән үҫемлектәрҙе, хайуандарҙы, ҡоштарҙы, бөжәктәрҙе табырға була. Шулай уҡ унда археология ҡомартҡылары, баҡыр рудаһы, алтын ятҡылыҡтары, уларҙы эшкәртеүсе предприятиелар, медицина, мәғариф учреждениелары, дауаханалар, аптекалар, мәктәптәр, гимназиялар, техникумдар, училищелар, йәмәғәт ойошмалары, китапханалар, музейҙар, театрҙар, ижади коллективтар, районда йәшәүсе ерле халыҡтың ауыҙ-тел ижады, музыкаль фольклоры тураһында мәғлүмәттәр ҙә урын алды.

Биографик мәҡәләләрҙә Баймаҡтың билдәле кешеләре - район үҫешенә үҙ өлөшөн индереүсе тарихи шәхестәр, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, Советтар Союзы Геройҙары, Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, районда тыуып үҫеп, илебеҙҙең фән, әҙәбиәт, сәнғәт өлкәләрендә ҙур уңыштарға өлгәшеүсе арҙаҡлы шәхестәр, дәүләтебеҙҙең почетлы исемдәренә, ордендарына, премияларына лайыҡ булыусылар тураһында тулы мәғлүмәт сағылдырылды. Китаптың ҡушымтаһында "Әсәлек даны"миҙалына лайыҡ булған күп балалы әсәләрҙең исемлеге бирелде. Беҙҙең районда 200-гә яҡын фән кандидаттары, докторҙары, "Халыҡ", "Өлгөлө" тигән исемдәргә лайыҡ булған 25 коллектив бар икән.

Китапта йөмғеһе 2240-тан ашыу мәҡәлә, 550-нән ашыу иллюстрация урын алды. Айырым шәхестәрҙең фотоһын урынлаштырғанда уларҙың дәүләт наградалары булыу-булмауына иғтибар иттек. Шул уҡ ваҡытта тарихи материалдарҙы ла фотолар менән байытырға тырыштыҡ.

Энциклопедияны әҙерләү ваҡыты бик ҡыҫҡа булды. Шуға ла "китапҡа шул кеше инмәгән", "был ваҡиға төшөп ҡалған", "шул мәсьәләгә иғтибар ныҡ бирелмәгән" тигән һүҙҙәрҙе ҡабул итәбеҙ. Уларға яуап итеп шуны ғына әйтәм: район хакимиәте башлығы районды киләһе юбилейына энциклопедияның икенсе томын әҙерләү зарурлығы хаҡында белдерҙе.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# АҠҺАҠ ТИМЕРҘЕҢ...

## башҡорт ерҙәренән үтеүе

**Билдәле булыуынса, бөйөк яулап алыусы Тимерлан Алтын Урҙаның Джучи олоҫона ике бөлдөргөс һөжүм яһай. Беҙҙе уның тәүге походы ҡыҙыҡһындыра. Тап шул ваҡытта Аҡһаҡ Тимерҙең 200 меңлек ғәскәре Башҡортостан ерҙәре аша үтә. Был ябырылыу башҡорт халҡының тарихында тәрән эҙ ҡалдыра. Аҡһаҡ Тимерҙең исеме башҡорттоң күп хикәйәттәрендә, риүәйәттәрендә, шәжәрәләрендә һаҡланған. Үкенескә ҡаршы, фольклор тарих өсөн нигеҙ булып хеҙмәт итә алмай. Шуға күрә беҙ аҙ һанлы яҙма ҡомартҡыларҙан мөмкин тиклем күберәк мәғлүмәт алыуҙы бурыс итеп ҡуябыҙ. Тәҡдим ителгән хеҙмәттә әлеге тема буйынса ике төп сығанаҡҡа, Аҡһаҡ Тимерҙең тарихнамәсеһе Низам-әд-дин Шәмиҙең 1401-1404 йылдарҙа яҙған "Зәфәр-намә"һе ("Еңеүҙәр китабы") һәм Шәрәф әд-дин Йәздиҙең 1424-1425 йылдарҙа Шаһрух исемле хаким идара иткән осорҙа ижад иткән "Зәфәр-намә"һе. Шулай уҡ XIX быуат тарихсылары Ф.Ф. Шармуаның, М.И. Иваниндың, В.П. Костюкованың эштәрен дә ҡулландыҡ.**

### Аҡһаҡ Тимерҙең яуға сығыуы

Сығанаҡтарҙа бәйән ителеүенсә, Тимер Туҡтамыш ханға ҡаршы походҡа ныҡлап әҙерләнә. Тажиктарҙан һәм төрки халыҡтарҙан торған яҡшы ҡоралланған ғәскәре менән юлға сыҡҡанда запасҡа бер йылға етерлек аҙыҡ ала. 1390 йылдың көҙө-ҡышында яугирҙар Ташкентта туҡтала. Бөйөк әмир ҙә шунда туҡтай. Үҙенең ҡурҡыныс ниәтен тормошҡа ашырыуға фатиха алыу маҡсатында ул Хожәнд янында Маслахат исемле шәйехтең ҡәберенә зыярат ҡыла. Ҡайһы бер мосолмандарҙың инаныуы буйынса, билдәле әүлиәләрҙең ҡәберҙәре юғарынан бәрәкәт биреү көсөнә эйә. 1391 йылдың ғинуар айында улар Отрарға, ике бөйөк төрөк суфыйы Арыҫлан-бабаның (1126 йылда мәрхүм була) һәм уның уҡыусыһы Әхмәт Йәсәүиҙең (1166 йылда мәрхүм була) ҡәберҙәренә юл тота. 21 февралдә ҡоролтай үткәргәндән һуң Сығатай ғәскәрҙәре походҡа юллана. 22 мартта, Йассы (Ҡаҙағстандағы бөгөнгө Төркөстан ҡалаһы), Сауран һәм Ҡаратау тауҙарын уҙғас, төньяҡҡа һыуһыҙ сүллеккә боролалар. Был сүллектә һыу һәм аҙыҡ етешмәү сәбәпле, бик күп аттар үлә.

6 апрелдә ташҡындың иң шашынған мәлендә Һары Һыу йылғаһына етәләр. Йылғаны аша кисеү бер нисә көнгә һуҙыла. Шул ваҡытта Дәште Ҡыпсаҡтан әмир Едигейҙың (башҡорт ауыҙ-тел ижадында Иҙеүкәй исеме менән билдәле. **- Ред.**) ике нөгәре (монгол хандарының шәхси гвардияһы һуғышсыһы. **- Ред.**) ҡаса. Едигей карателдәр отрядының төп илһамландырыусыһы була. Тәүҙә Туҡтамышҡа хеҙмәт итеүсе элекке Алтын Урҙа әмире Едигейҙың Һарай менән Сәмәрҡәндтең аралары боҙолоуында "өлөшө" ҙур була. Һуғыштан алдағы ваҡыт хаҡында Л.Н.Гумилев: "Туҡтамыш Джучиҙар дәүләтен уларҙың тарихи сиктәрендә тергеҙергә ниәтләй. Ошо бөйөк даулашыуҙар ваҡытында Джучиҙар 1357 йылдарҙа Әзербайжанды һәм 1371 йылда Тимерландың империяһына ҡушылған Хорезмды юғалта. Тоҡанып киткән һуғышты Туҡтамыштың дан, дәрәжә яратыусанлығына һәм уның ниндәйҙер шәхси мәнфәғәттәренә ҡайтарып ҡалдырырға ярамай. Хан үҙенең бәктәренең һәм нухурҙарының ихтыяры менән килешергә мәжбүр була. Ә тегеләре улар менән Тимер-бәк ҡуйған кеше түгел, ә бойондороҡһоҙ Сыңғыҙхан тоҡомонан булған кеше идара итеүен теләй", - тип яҙа.

В. П. Костюков был осорҙо бер аҙ икенсе рухта тасуирлай. "Әҙәбиәттә Туҡтамышты һәләтһеҙ, уңышһыҙ, һәм үҙенең хакимына ҡаршы сығыуы сәбәпле, Джучи олоҫон тулыһынса бөтөрөүгә сәбәпсе булған, Тимерҙең "бешеп етмәгән" ханы итеп һүрәтләү таралған... Әгәр Тимерҙең ярҙамы булған тип иҫәпләгәндә лә, был Туҡтамыштың сәйәси офоҡҡа бары тик уның булышлығы менән генә сығыуын аңлатмай. Уны үҙенең хакимы һүҙенән сыға алмаған, марионетка хан тип һанау шулай уҡ хаталы ҡараш. Тотороҡһоҙ һәм ябай булмаған эске һәм тышҡы сәйәси хәлгә ҡарамаҫтан, Туҡтамыш өс тиҫтә йылдан ашыу дәүләт башында, Джучи олоҫоноң әһәмиәтле һыны булып ҡала алған. Был факт уның, Тимерҙең йоғонтоһо менән йәки уның ярҙамы булыу-булмауына ҡарамаҫтан, етәкселек һәләте, власть потенциалы булыуын раҫлай. Шибанид тарихнамәһендә лә Туҡтамыш эшлекле һәм ғәҙел хаким итеп һүрәтләнә".



Аҡһаҡ Тимерҙең башҡорт еренә юлы.

Ханды яуыз император менән низағлаштырып, Едигей Урҙала властвы үҙ ҡулына төшөрөргә тырыша, әммә уңышһыҙлыҡҡа юлығыуы сәбәпле ҡасырға мәжбүр була. Сәмәрҡәндкә килгәндән һуң, Урта быуат тарихсыһы Ибн Арабшах хәбәр итеүенсә, үҙенең яңы союзнигын (йәғни Аҡһаҡ Тимерҙе): "Һин алыҫ дәүләттәргә юл тотаһың, ҡырағай һәм ташландыҡ урындарҙы үтәсәкһең, шул арҡала ҡурҡыныстарға осраясаҡһың, һырттарҙы һәм сүллектәрҙе үтәсәкһең һәм сәйәхәттәр китаптарын аҡтарасаҡһың, ә бына һыуыҡ табыш һинең күҙҙәрең алдында, һин уны үҙеңә еңел булғанса һәм хуш килгәнсә тиҙ төңөлдөрәсәкһең - ни өсөн икеләнергә һәм йоҡларға? Ниңә ваҡытты һуҙырға һәм ситкә ҡуйырға? Тәүәккәллек ит, һине тотасаҡ ҡәлғә, туҡтатасаҡ кәртә, баҫтырасаҡ ҡылыс булмаясаҡ икәнендә мин һиңә ант итәм. Унда әтрәгәләмдәр һәм ҡәбәхәттәр генә. Байлыҡтары урланасаҡ һәм хазиналар үҙ аяҡтары менән һиңә киләсәк", - тип өгөтләй.

Тимер иһә, Алтын Урҙаның көсөн белә, әгәр ҙә Туҡтамыштың ғәскәрендә хыянатсылар булмаһа, был тиклем ҡурҡыныс эшкә ҡыйыулыҡ та итмәҫ ине. Һуңынан был турала ул: "Туҡтамыш менән һуғышта уның әмирҙәре, үҙҙәренең хужаларының һәм минең дошманым Туҡтамыштың бар изгелектәрен онотоп, миңә ялыуҙар һәм шикәйәттәр ебәрҙе. Һәм мин уларҙы (әмирҙәрҙе) бының өсөн ҡарғаным, сөнки улар тоғролоҡто һәм хужалары алдындағы бурыстарын онотоп, миңә күсте. "Әгәр улар үҙҙәренең хакимдарына хыянат итә икән, ул саҡта миңә уларҙан нимә көтөргә?" тип уйланым".

### Ниндәй маҡсат алып килә бында?

28 апрелдә Сығатай ғәскәрҙәре бөгөнгө көндә Ҡаҙағстандағы Йөҙҡаҙған ҡалаһынан 100 саҡрым төньяҡ-көнбайыштараҡ урынлашҡан Олотау һыртына етәләр. Һуңынан Йылансыҡ, Ҡаратурғай йылғаларын үтеп, тарихи сығанаҡтарҙа "Анакаркуюн" йәки "Атакарагуй", тип билдәләнгән урынға етәләр. Был урында ғәскәр башлығы яугирҙарына ял итергә ирек бирә. 6 майҙа ҙур һунар ойошторалар, аҙыҡ запастарын тулыландыралар. 12 майҙа Аҡһаҡ Тимер үҙенең йәш ейәне Мөхәммәт Солтан мырҙаны шәйләккә (разведкаға) ебәрә. Ике көнлөк юл үткәс, шәйләкселәр ҡуҙҙары ла һүнеп етмәгән 5-6 усаҡҡа юлығалар. Көнбайышҡа йүнәлеп, тағы ла бер нисә көндән улар 500 тирәһе усаҡҡа юлыға. Әммә ике осраҡта ла кешеләрҙең дә, аттарҙың да эҙе осрамай. Күрәһең, Туҡтамыштың кешеләре ваҡытты еңер өсөн хәйлә ҡорған була. Билдәле булған факттарға нигеҙләнеп, ҡышты хан Башҡорт ерҙәрендә үткәргән, тип уйларға нигеҙ бар. Әйтергә кәрәк, хандың тирмәләренең береһе Өршәк йылғаһына ҡойған Үҙән йылғаһы буйында урынлаша. Тағы ла бер ҡыҙыҡ факт: "Башҡорттар тарихы" тигән боронғо ҡулъяҙмала XIV быуат уртаһында йәшәгән Тулҡахужа исемле хаким телгә алына. УнынТуҡтамыштың атаһы Туйхужа ла булыуы мөмкин.

**Салауат ТАЙМАҪОВ,**
**тарихсы.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР

### Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

Башҡорт туны билле тундан шуныһы менән айырыла, беренсенән, ул тубыҡтан аҫҡа төшөп тора, икенсенән, уның арҡаһы һәр ваҡыт төҙ, ә билле тундың исеме үк әйтеп тороуынса, биле тар итеп тегелә. Билле тун кеүек үк, тун да тыштан туҡыма менән ҡаплана, билбау менән быуыла. Улар башлыса һарыҡ тиреһенән тегелә, хәллерәктәр тундың ситен ҡама тиреһе менән ҡырпыулап, бүре, төлкө тиреһенән тегә. Төймәһе булмай йәки 1-2 төймә тегелә.

Ирҙәрҙең өҫ кейемдәре - бишмәт, кәзәки һәм камзул билләп тегелә, мотлаҡ эске ҡаты була, төймә менән ҡаптырып ҡуйыла һәм сағыштырмаса ҡыҫҡа була. Бишмәт - көндәлек кейем, оҙон еңле. Уны люстрин, нанка, ҡытай тауары кеүек фабрикала етештерелгән тауарҙан тегәләр. Кәзәки бишмәткә ҡарағанда ҡыҫҡағыраҡ, еңе лә терһәккә тиклем генә. Торма яғалы, уң яҡ өлөшөндә, шулай уҡ ҡайһы берҙә түшендә кеҫәһе була. Бишмәттең дә, кәзәкиҙең дә төймә йә ҡаптырғыстан тыш, эске яҡтан бәйләп ҡуя торған бауы була. Кәзәки бишмәт аҫтынан, күлдәк өҫтөнән кейелә, бишмәттең тауарынан тегелә.

Камзул - еңһеҙ, ҡыҫҡа һәм тар, тәнгә һылашып тора. Ҡара төҫтәге тауарҙан тегелә. Уның кеҫәләре юҡ, ә 1 см-ҙан артмаған бәләкәй генә торма яғаһы элмәк менән эләктерелеп ҡуйыла. Кәзәки кеүек үк, камзул да бишмәт аҫтынан кейелә. Камзул башҡорттар араһында киң таралған, ә бына кәзәкиҙе бөтөн урында ла, бигерәк тә төньяҡта киймәйҙәр.

Ирҙәр күлдәге бөтөн башҡорттар өсөн дә бер үк, шулай ҙа ҡайһы бер деталдәре һәм туҡымаһы буйынса айырмалар бар. Күлдәк һәр ваҡыт киң итеп тегелә, тубыҡҡа етеп, хатта унан да аҫҡараҡ төшөп тора, киң ятма яғалы, киң, оҙон еңле. Муйыны бау менән иркен итеп бәйләп ҡуйыла. Силәбе башҡорттары араһында күлдәктең түш өлөшө сигелгән, хатта мәрйенләп биҙәлгән күлдәктәр осраған. Шул уҡ Силәбе өйәҙендә XX быуаттың башында селтәрле күлдәк тип йөрөтөлгән күлдәк төрө булған. Уның яғаһы, ең осо һәм күлдәктең сите ебәк еп менән сигелгән. Ошондай уҡ, әммә ҡыҙыл туҡыманан тегелгән күлдәкте йәш кәләш иренә туй бүләге итеп әҙерләгән. Бөрө өйәҙе башҡорттарының етен йәки кизе-мамыҡтан туҡыған төрлө төҫтәге туҡыманан тегелгән күлдәктәренең дә яғаһы сигеүле. Тик уларҙа сигеү йөн һәм гәрез (йөнгә оҡшаған мамыҡ туҡыма төрө) менән башҡарылған һәм йышыраҡ мариҙарҙың күлдәктәренә оҡшаған. Яғаһы биҙәкләп сигелгән боронғо киндер күлдәк тә туй бүләге иҫәпләнгән (һүрәт).



***✓ Ҡурайыбыҙҙы һаҡлау үҙебеҙҙе, үҙ асылыбыҙҙы һаҡлауға тиң. Был йәһәттән ҡурайыбыҙҙы республикабыҙ символикаһына индереүҙәре ифрат аҡыллы, дөрөҫ аҙым булды, тип иҫәпләйем.***

**Мәҙәниәт йылында мәҙәниәт хаҡындағы әңгәмәләрҙе дауам итәбеҙ. Әгәр ҙә "Мәҙәниәт ҡайҙан башлана?" тигән һорау ҡуйылһа, "халыҡ сәнғәтенән" тигән яуап ишетер инек. Был, һис һүҙһеҙ, шулай. Тамырһыҙ ағас булмағандай, халыҡ сәнғәте булмаһа, мәҙәниәт тә юҡ. Мәҙәниәтһеҙ милләт тә булмай. Тап шуның өсөн беҙ бөгөн башҡорт милли мәҙәниәте хаҡында һүҙ алып барабыҙ икән, бының нигеҙендә халҡыбыҙ сәнғәте ятҡанын аңларға тейешбеҙ. Бар беҙҙең ундай алтын тамырҙарыбыҙ, аҫыл ҡомартҡыларыбыҙ. Улар: ҡурайыбыҙ, оҙон көйөбөҙ, бейеүебеҙ. Атаҡлы ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, билдәле журналист, Башҡортостан телевидениеһының "Хазина" программаһын алып барыусы, һөнәре буйынса математик Юлай Ишбулды улы ҒӘЙНЕТДИНОВ ана шул аҫыл ҡомартҡыларыбыҙ хаҡында фекер йөрөтә.**

2014
МӘҘӘНИӘТ ЙЫЛЫ
ГОД КУЛЬТУРЫ

# ҠУРАЙҘЫ БАШҠОРТ

## ул биш тишекле

### Сәнғәт һәм математика

Минең өсөн математика һәм сәнғәт бер-береһенә ят күренеш түгел. Ҡурай буйынса остаздарым - Әҙһәм Исҡужин менән Кәрим Дияров ағайҙарым. Әҙһәм ағай заманында хәрби осоусылар училищеһын тамамлаған. Ә был училищеға уҡырға инер, унда уҡыр өсөн физика менән математика фәндәрен бик һәйбәт белергә кәрәк. Хәрби хеҙмәттән ҡайтҡас, Башҡорт дәүләт университетының физика-математика факультетына ситтән тороп уҡырға инергә әҙерләнеп йөрөгәнендә, Әҙһәм ағайҙың ҡурай уйнауына, йырлауына ғашиҡ атаҡлы ғалим-тюрколог, филология фәндәре докторы Жәлил Кейекбаев: "Әҙһәм, һинең урының унда түгел, ә филология факультетында", - тип, ағайҙы университеттың филология факультетына инергә күндергән.

Кәрим ағай Дияров, иһә, Бөйөк Ватан һуғышына тиклем үк утыҙынсы йылдарҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтының физика-математика факультетын тамамлаған кеше, хаҡлы ялға сыҡҡансы физика, математика уҡытыусыһы булып эшләне. Әҙһәм ағай ҙа, Кәрим ағай ҙа икеһе лә бөйөк ижадсы, ҡурайсы, сәсән, йыраусы булдылар. Һәм тағы минең математиканан тәүге уҡытыусым, Баймаҡ районының Таулыҡай мәктәбендә оҙаҡ йылдар директор булып эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан Хөрмәт Халис улы Байегетов Баймаҡ сәсәндәре тураһында "Сәсәндәр иленә сәйәхәт" тигән китапҡа ингән. Университет тамамлағанда диплом эшемде физика-математика фәндәре докторы профессор Хәйрулла Хәбибулла улы Мортазин етәкселегендә яҙҙым. Хәйрулла ағай иҫ киткес оҫта йыраусы, өҫтәүенә, бына тигән бейеүсе лә.

Уның улы Урал Мортазин математика факультетын тамамланы ла, сәнғәт юлы менән китте, ул бөгөн республикабыҙҙың танылған бейеүселәренең береһе.

Ҡыҫҡаһы, мин сәнғәт менән математика араһында бер ниндәй ҙә айырма күрмәйем. Улай ғына ла түгел, билдәле булыуынса, Аристотель дәүерендә музыка математиканың бер өлөшө һаналған. Урта быуат математигы Әл-Фараби музыка тураһында трактат яҙған.

### Ҡурайыбыҙ

Ҡурай - башҡорттоң иҫ киткес бай тарихын үҙенә туплаған, үҙенә һыйҙырған бөйөк ҡомартҡы. Ҡурайсы ул ҡурай моңо аша халҡының тарихын һөйләүсе. Ҡурайсы менән ҡурайҙа уйнаусы араһындағы айырманы элек-электән белгәндәр. Ҡурайсы ул, ҡабатлап әйтәм, иң беренсе нәүбәттә халҡының, көйҙәрҙең тарихын тәрәндән белеүсе, уларҙың төрлө ырыуҙарға хас варианттарын өйрәнеп, йөрәге аша үткәреп башҡарыусы. Ҡурайҙы һыҙғыртырға, унда көй уйнарға өйрәнеүе ҡыйын түгел. Ҡурайға бары тик ошондай кимәлдә генә мөнәсәбәте булған кеше ҡурайсы түгел, ҡурайҙа уйнаусы ғына.

Ҡайһы берәүҙәр, ҡурай беҙҙең музыка ҡоралы, тип, сәхнәгә сығып уйнай, китаптар, энциклопедиялар, белешмәләр сығара ул. Әммә уны нисек кенә үҙләштереп маташмаһындар, ниндәй генә китаптар сығарылмаһын, барыбер ҙә ысынбарлыҡтан китеп булмай. Сөнки ҡурай үҙенең башҡорт ерлегенән башҡа ҡурай түгел. Ҡурайҙы ерлегенән айырһаң, ул биш тишекле һыбыҙғы ғына. "Ерлек" тигән һүҙ үҙенә бик тәрән мәғәнә һыйҙыра. Ерлек - ул беҙҙең тарих, көйҙәребеҙ, ул беҙҙең меңәр йылдар һуҙымында тарихыбыҙҙы, йырҙарыбыҙҙы хәҙергегә килтереп еткергән данлыҡлы ҡурайсылар. Беҙ уларҙың исемдәрен беләбеҙ. Башҡа халыҡтар иһә, был беҙҙең ҡурайсыбыҙ, тип бер кемде лә әйтә алмай, уларҙың ҡурайҙа уйнай торған көйҙәре лә юҡ.

Мәҫәлән, Тәлғәт Муҡышев атлы ҡаҙаҡ егете беҙҙең Өфө сәнғәт институтының ҡурай класында уҡыны. Бик тырыш егет. Һәләтле. Ул күкрәккә һалып ҡурайҙа уйнарға ла өйрәнде. Хәҙер ул Алма-Ата консерваторияһында уҡыта. Ҡаҙаҡтың думбырала уйнай торған бихисап көйҙәре бар, ә ҡурайҙа уйнай торған көйҙәре юҡ. Тәлғәт төрлө Халыҡ-ара фестивалдәрҙә, конкурстарҙа ҡатнашып, башҡорт халыҡ көйҙәрен уйнап йөрөй икән. Бик хуп, тип әйтер инең, "Ҡараунһарай" фольклор төркөмө егеттәре, мәҫәлән, уның Үзбәкстанда үткән фестивалдә ҡаҙаҡ халыҡ йыры тип иғлан иттереп, "Ҡаһым түрә"не башҡарыуына шаһит булған. Ҡаҙаҡ радиоһын тыңлаусылар уның, ҡаҙаҡ халыҡ көйө, тип иғлан иттереп, беҙҙең "Сыңрау торна"ны башҡарыуын ишеткән.

Ҡыҫҡаһы, ҡурай беҙҙеке, тип ниндәй генә китаптар сығармаһындар, интернет тултырмаһындар, ҡурай беҙҙең ерлектән айырылһа, әйткәнемсә, биш тишекле һыбыҙғы ғына. Ҡурай тик башҡорттоҡо ғына. Ғөмүмән, халыҡ музыка ҡоралы ерлекһеҙ булмай. Халыҡ музыка ҡоралының үҙ репертуары, башҡарыу традициялары була. Ул быуындар аша тапшырыла. Ҡурайҙы, тота килеп, әйҙә, беҙҙеке лә булһын, тип кеҫәгә һалып алып булмай.

Ҡурайыбыҙҙы һаҡлау үҙебеҙҙе, үҙ асылыбыҙҙы һаҡлауға тиң. Был йәһәттән ҡурайыбыҙҙы республикабыҙ символикаһына индереүҙәре ифрат аҡыллы, дөрөҫ аҙым булды, тип иҫәпләйем.

***Ҡайһы берәүҙәр, ҡурай беҙҙең музыка ҡоралы, тип, сәхнәгә сығып уйнай, китаптар, энциклопедиялар, белешмәләр сығара ул. Әммә уны нисек кенә үҙләштереп маташмаһындар, ниндәй генә китаптар сығарылмаһын, барыбер ҙә ысынбарлыҡтан китеп булмай. Сөнки ҡурай үҙенең башҡорт ерлегенән башҡа ҡурай түгел. Ҡурайҙы ерлегенән айырһаң, ул биш тишекле һыбыҙғы ғына. "Ерлек" тигән һүҙ үҙенә бик тәрән мәғәнә һыйҙыра. Ерлек - ул беҙҙең тарих, көйҙәребеҙ, ул беҙҙең меңәр йылдар һуҙымында тарихыбыҙҙы, йырҙарыбыҙҙы хәҙергегә килтереп еткергән данлыҡлы ҡурайсылар. Беҙ уларҙың исемдәрен беләбеҙ. Башҡа халыҡтар иһә, был беҙҙең ҡурайсыбыҙ, тип бер кемде лә әйтә алмай, уларҙың ҡурайҙа уйнай торған көйҙәре лә юҡ.***

### Хазиналар эҙләйем

Күрше өлкәлә йәшәүсе милләттәштәребеҙ ҡатнашлығында бик күп "Хазина" тапшырыуҙары әҙерләргә насип булды. Һарытау, Һамар, Ҡорған, Силәбе, Ырымбур өлкәләрендә лә булып, унда йәшәүсе күп кенә милләттәштәребеҙҙән һирәк осраған йырҙар, көйҙәр яҙып алдыҡ һәм эфирға сығарҙыҡ. Австрияның баш ҡалаһы Венала 20-се быуат башынан эшләп килгән фонограммархив бар. Германияның Берлин ҡалаһында ла ошо уҡ дәүерҙә барлыҡҡа килгән шундай уҡ архив эшләй. Ошо ике архивта булып, Беренсе донъя һуғышында әсирлектә булған башҡорт һалдаттары башҡарыуында яҙып алынған йырҙарҙың күсермәләрен алып ҡайтырға насип булды. Мәғлүм булыуынса, Әхмәтзәки Вәлидиҙең иң яҡын, иң тоғро дуҫтарының береһе, хәҙерге Ҡорған өлкәһе Әлмән районы Тәңрекүл ауылы башҡорто, арҙаҡлы ғалим Ғәлимйән Таған булған. Уның башҡарыуында 1931 йылда Венала Роберт Лах, Герберт Янски тигән ғалимдар яҙып алған башҡорт халыҡ йырҙарының алтыһының күсермәһен үҙебеҙгә алып ҡайтыу бәхете минең өлөшкә төштө. Мин был яҙмаларҙы, әлбиттә, архивҡа тапшырҙым. Шулай уҡ махсус "Хазина" тапшырыуы шул йырҙарға һәм Ғәлимйән Тағанға арналды.

1925 йылда Парижда Сорбонна профессоры Перно Йомабай Иҫәнбаев башҡарыуында 4 көй яҙып алған. Интернет аша Париж милли китапханаһының аудиовидео яҙмалар департаменты каталогын таптым. Унда Йомабай Иҫәнбаев менән бергә булған ҡайһы бер кешеләрҙең яҙмалары теркәлгән, ә бына Йомабай ҡурайсынан яҙып алынған көйҙәр теркәлмәгән. Тимәк, улар фондҡа ла инмәгән һәм ҡайҙалыр шунда ятырға тейеш. Әгәр ҙә профессор быны ваҡытында эшләп өлгөрмәгән булһа, башҡаларҙың быға артыҡ иҫтәре китмәүе лә бик мөмкин. Шул яҙмаларҙы табыуҙы мин үҙемдең бурысым һанайым. Мин быны эшләп өлгөрмәһәм, башҡа кеше уны тапһа ине. Йомабай Иҫәнбаев мәшһүр ҡурайсы булған һәм уның көйҙәре беҙгә әйләнеп ҡайтырға тейеш.

### Ғалимдарға теләгем

Ҡайһы ваҡыт минән фольклор буйынса эшләгән ғалимдарҙың хеҙмәттәренә ҡарата мөнәсәбәтемде белдереүемде һорайҙар. Әммә фольклор ғилеме тураһында һүҙ алып барыу минең тарафтан уңайһыҙ булыр. Сөнки был эш менән фән докторҙары, ғалимдар шөғөлләнә. Мин хатта фән кандидаты ла түгел. Шулай булғас, уларҙың эштәре хаҡында һүҙ әйтеү әрһеҙлек булыр тип уйлайым. Шулай ҙа, бер һүҙ башлағас, минең уларға ҙур теләгемде лә әйтеп үткем килә. Ғалимдарҙың яҙғандарын китаптарында, матбуғат биттәрендә уҡып барғас, ҡайһы бер фекерҙәремде әйтеү ҙә, бәлки, урынлы булыр.

Ғалимдар ҡомартҡыларыбыҙға ҡарата һаҡ булһындар ине. Беҙгә ул ҡомартҡыларыбыҙҙы атай-олатайҙарыбыҙ нисек тапшырған, улар беҙгә шулай килеп еткән. Киләсәккә лә улар шул рәүешле тапшырылырға тейеш. "Ҡомартҡы" һүҙенең төп мәғәнәүи асылы шуға ҡайтып ҡала.

Һүҙ юҡ, ғалимдарыбыҙ был ҡомартҡыларыбыҙҙы өйрәнеп, ғилми хеҙмәттәр яҙһын, тик ҡомартҡыларға теймәһендәр. Үҙгәртмәһендәр. Ҡағылмаһындар. Арзан шөһрәт артынан ҡыуып "асыш"тар яһамаһындар. Был йәһәттән



# ЮҒАЛТЫУ – ТАБЫШТАРЫ

## (Булған хәл)

Ни эшләргә? Ҡайҙа барырға? Кемдән ярҙам һорап ҡарарға? Был һорауҙар инде аҙнанан артыҡ туғыҙ ҡатлы йорт алдындағы эскәмйәлә оҙон һаплы һеперткеһен ҡосаҡлап ултырған йәш ҡатындың мейеһен быраулай. Ун йәшлек улын, Иреген, баш ҡалалағы дауаханаларҙың береһенә илтеп һалып, табиптар, баландың мейеһенә кисекмәҫтән операция яһарға кәрәк һәм бының өсөн ҙур ғына күләмдә аҡса талап ителә, тигәс, Зифа бөтөнләй ҡойолдо ла төштө. Улын терелтер өсөн барыһын да эшләргә әҙер, хатта йәнен дә аямаҫ ине, ләкин табиптар һораған аҡсаны табыу осон оҫҡа саҡ ялғап йәшәгән яңғыҙ ҡатындың ҡулынан килә торған эш түгел шул. Уның барыр ере лә, һорар кешеһе лә юҡ һәм бөгөнгә көндә башына төшкән бәләне бер үҙе күтәрергә, унан арыныу сараһын бер үҙе эҙләргә мәжбүр.

Эшләр эшем, торор мөйөшөм, ҡыуанысым, йыуанысым, күҙ нурым - улым бар, тип, бығаса булғанына шөкөр итеп йәшәһә лә, һуңғы көндәрҙә Зифа: "Ниндәй гонаһтарым өсөн Хоҙай мине был яҙмышҡа дусар итте икән?" - тигән һорауҙы ла үҙ-үҙенә йыш бирә башланы һәм бик оҙон булмаған тормош юлын ҡат-ҡат барлап, уға яуап эҙләне. Ләкин таба алманы. Бөтөнләй гонаһһыҙ түгелдер ҙә, әммә Хоҙайҙың ҡарғышы төшөп, ошондай ҙур ҡайғыға һалырлыҡ хилаф эштәр ҡылғаны ла булманы, шикелле.

Ул ябай ғына ғаиләлә тыуып үҫкән, ябай ғына ауыл ҡыҙы, туғыҙынсы класты тамамлағас, иптәш ҡыҙҙарына эйәреп, яҡындағы ҡалалағы һөнәрселек училищеһына уҡырға килеп инде. Уны тамамлағас, фабрикала тегенсе булып эш башланы. Торор урыны дөйөм ятаҡта ине. Ауылдаштар өсәүләшеп бер бүлмәлә йәшәне. Ҡыҙҙар ял һайын ауылға ҡайтып, ата-әсәләренә ярҙам итер булды. Ҡайтҡан һайын аҙна буйына етерлек аҙығын да тейәп килделәр. Ә эшләп алған аҡсаларын башлыса кейем-һалымға тотондолар. Бигерәк тә арттарынан егеттәр саба башлағас, ҡыҙҙар өҫ-баштарына нығыраҡ иғтибар бүлде. Зифаның бүлмәләштәре дөйөм ятаҡта йәшәй башлау менән егетле булып алғайны. Эштән ҡайтыу менән тиҙ генә ҡапҡылап алып, биҙәнеп-төҙәнеп, осрашыуға йүгерер булдылар. Ә бына Зифаға, ниңәлер, күҙ һалыусы табылмай торҙо. Иптәш ҡыҙҙары осрашыуға киткән һайын: "Ярар, үҙ насибым табылыр әле бер саҡ", - тип үҙ-үҙен йыуатты.

Ысынлап та, насибы оҙаҡ көттөрмәне ҡыҙҙы. Фабрикаға эшкә килеү менән Зифаны Ирина исемле утыҙ йәштәр самаһындағы ҡатынға беркетеп ҡуйғайнылар. Бик тәкәббер, уҫал холоҡло күренһә лә, Ирина эшкә маһир, үҙ һөнәренең оҫтаһы ине. Тәүге көндән үк Зифаға баш күтәрергә лә ирек бирмәй, тегенсе эшенең бар нескәлектәренә төшөндөрөргә тотоноп китте. Уның теккән әйберҙәрен ҡат-ҡат тикшереп, ниндәй ҙә булһа ғәйеп табып, ҡайтанан эшләргә мәжбүр итте. Зифаның ризаһыҙ ҡарашын күрһә: "Әйҙә, әйҙә, аҙаҡ рәхмәт кенә уҡырһың", - тип ҡырт киҫер булды. Ысынлап та, ҡыҙ тиҙ арала оҫта ғына тегенсегә әйләнеп китеп, Иринаға эстән генә рәхмәттәрен дә әйткеләп ала торғайны. Бер ваҡыт Ирина: "Әйҙә әле үҙеңде бер ҡунаҡ итәйем, етмәһә, бөгөн минең тыуған көн", - тип, эштән һуң үҙҙәренә эйәртеп алып ҡайтып китте. Фатирға килеп инеү менән тиҙ генә өҫтөн алыштырып, табын да әҙерләй һалып ҡуйҙы ҡатын. Зифаны өҫтәл артына саҡырып, ундағы шешәнән шарап ҡойоп, ҡулына тотторҙо ла: "Апайыңды хөрмәт итһәң - бөтөргәнсе эсәһең", - тип ҡыҙҙы ҡыҫтай ҙа башланы. Бүлә-бүлә булһа ла Зифа бокалдағы шарапты төпләп ҡуйырға мәжбүр булды. Ул да булмай, фатирға бик үк йәш күренмәгән бер егет килеп инде һәм: "Абба, маҡтап ҡына йөрөйөм икән, апай, был минән тыуған көнөңә бүләк", - тип, ҡулындағы төргәкте һүтеп, өҫтәлгә ике шешә араҡы килтереп ултыртты. Ирина егетте бер туған ҡустым, исеме Марс, тип таныштырҙы. Ҡарашы йәндә өшөтөрлөк шомло тойолһа ла, егет төҫ-башҡа арыу ғына ине. Телгә лә үткер генә булып сыҡты. Марс өҫтәл артына ултырыу менән дилбегәне үҙ ҡулына алып, төрлө ҡыҙыҡ-мыҙыҡтар һөйләй-һөйләй, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡыҫтап эсерергә тотоноп китте. Үҙе лә тулы рюмкаларҙы бер-бер артлы ауыҙына оҙатты. Тәүге эскән шарабы уҡ быуынына төшөп, Зифаның ихтыярын ҡаҡшатҡайны инде. Шуға ла ул Марстың да, Иринаның да ҡыҫтауҙарына бик ҡаршылаша ла алманы. Эскән араҡыһының һәр йотомо аҡрынлап аңын томалай барып, бөтөнләй үҙ-үҙен белештермәҫ хәлгә еткерҙе.

Иртәгәһен уянып китеп, үҙен шыр яланғас килеш Марс ҡосағында ятҡанын күргәс, ҡыҙ ҡапылдай ҡорт саҡҡандай һикереп тороп, иҙәндә туҙышып ятҡан кейемдәрен кейә һалды ла, был фатирҙан тиҙерәк сығып тайыу уйы менән ишеккә ташланды. Уны ҡулын таҫтамалға һөртә-һөртә аш-һыу бүлмәһенән килеп сыҡҡан Ирина туҡтатты. "Кисә Марс менән өйләнешергә һүҙ ҡуйышып бөткәс, урынды икегеҙгә бергә һалдым инде", - тине ҡатын ҡыҙҙың һораулы ла, әрнеүле лә ҡарашлы йәшкә мансылған күҙҙәренә ҡарап. "Булыры - булған, бергә йәшәп алығыҙ ҙа китегеҙ", - тип, Ирина Зифаның пальтоһын ҡулына алып, кире сөйгә элеп ҡуйҙы.

Шул көндән ҡыҙ кем икәнлеген дә йүнләп белмәгән кеше менән йәшәп алып китте. Ирина комендант менән һөйләшеп, дөйөм ятаҡтан йәшәргә бүлмә алыуға өлгәште. Аҙ-маҙ донъя кәрәк-яраҡтары менән дә уртаҡлашты.

Марс үҙенең кем икәнлеген тиҙ танытты. Бер ҡайҙа ла эшләмәһә лә, ниндәйҙер юлдар менән аҡса табып, шулар бөткәнсе көн-төн байрам итергә әүәҫ булып сыҡты ул. Үҙенең дыуамал холоҡло, торғаны менән һуғыш суҡмары икәнен дә күрһәтеп өлгәрҙе. Барыһын да ҡурҡытып, өркөтөп, дөйөм ятаҡты дер ҡалтыратып йәшәне, тиһәң дә ярай. Ата-әсәһе менән таныштырыу өсөн Зифа уны ауылдарына эйәртеп алып ҡайтҡайны, унда ла эсеп алып, ғауға ҡуптарырға өлгәрҙе. Киткән саҡтарында атаһы ҡыҙын саҡырып алып: "Был бәндәне ҡабат эйәртеп йөрөп, күҙемә күрһәтәһе булма", - тип әйтеп ҡалды. Һуңыраҡ Зифа иренең ике тапҡыр төрмәлә ултырып сыҡҡанын да белде.

Ярты йыл самаһы бергә йәшәгәс, бер көндө бүлмәләренә милиционерҙар килеп инеп, бөтә ерҙең аҫтын-өҫкә килтереп, тентеү үткәрҙеләр. Марстың ҡулына бығау һалып, алып сығып та киттеләр. Кеше талағаны өсөн ете йылға ябып ҡуйҙылар уны. Судтан һуң Ирина Зифа янына килеп, илай-илай унан ғәфү үтенде. "Һине бик яҡын күреп, үҙ туғаным, киленем итергә уйлағайным. Өйләнһә, донъя көтөүҙән йәм табып, Марс та дөрөҫ юлға аяҡ баҫыр, кешесә йәшәр башлар, тип хыялланғайным. Бүрене бүреккә һалһаң да урманға ҡарай икән шул", - тине ул киленен ҡосаҡлап. Хушлашҡанда, улай-былай балаға уҙмаһыңмы, тип тә һорағайны. Бығаса уны-быны уйламаған Зифа ҡурҡышынан врачҡа бара һалып, тикшерелеп, үҙенең инде ике айлыҡ ауыры барлығын белде. Бына шунда йәш ҡатын, күҙе асылып, ниндәй хәлдә ҡалыуына, тормошоноң ысынбарлығына ныҡлап төшөндө һәм ҡото осоп, туйғансы ярһып иланы ла иланы.

Күрер күҙгә бар ағзаһы ла теүәл булып тыуҙы улы, әммә бик тә илаҡ ине. Күрәһең, таз һөйәгең ныҡлап асылып етмәй тыуғанда ҡыҫылып, башы зәғифләнгәндер, тигәйне бала табыу йортонда уҡ табиптар. Сабыйҙың ваҡыты-ваҡыты менән һушын юғалтып алыуы ла шуға ишара ине шул. Зәғиф баланы оҙаҡҡа ҡалдыра ла, балалар баҡсаһына ла йөрөтә алмай ине Зифа. Шуға ла декрет ялы тамамланыу менән фабриканан китеп, үҙҙәре йәшәгән дөйөм ятаҡҡа урам һепереүсе булып эшкә урынлашты. Был уға улы янында йышыраҡ булырға мөмкинлек бирҙе. Балаһын, бауыр итен, берҙән-бер йыуанысын күҙ ҡараһындай һаҡларға, бар көсөн һалып тәрбиәләргә тырышты ул. Ә бына улының атаһын, ярты йыл бергә йәшәгән ирен, нисектер, иҫенә лә алманы Зифа. Иринаның килеп: "Марсты бит төрмәлә һуйғандар", - тип әйтеүе лә уны тетрәндермәне.

**Мөҙәрис БАГАЕВ.**
**(Дауамы бар).**

БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП

# ҠОЛ БУЛҒАНСЫ...

## ереңде һаҡлап үлеүең артыҡ



**Гәзит иғлан иткән бәйге күңелгә хуш килде. Конкурста баҫыласаҡ һүрәттәр башҡорт халҡының тарихын, хәҙергеһен, киләсәген, уның гөрөф-ғәҙәтен, ауыҙ-тел ижадын сағылдырған йөкмәткеле булыр тип тә уйлайым. Бына Йәлил Сөләймәновтың "Һуңғы уҡ" ("Һуңғы һартай") әҫәре тап шундай йөкмәткеле.**

Һүрәттәге ваҡиғалар XIII-XIV быуаттарҙың икенсе яртыһына ҡараған монгол-татар яуына бәйле. Тарихтан күренеүенсә, был осорҙа башҡорт ырыу-ҡәбиләләре бик тарҡау булған. Шуға күрә бер ырыу дошманға ҡаршы көрәшкәндә икенселәренән ярҙам көтөп ала алмаған.

Мәсәлән, "Һуңғы һартай" тарихи эпосында Ялыҡ бей үҙ ырыуы көсө менән генә, батыр улдары Ҡармасан һәм Сәрмәсән, шулай уҡ Тәтегәс бей һәм башҡа ҡыйыу ырыуҙаштары менән генә Аҡһаҡ Тимер сиреүенә ҡаршы тора. Ҡол булғансы, тыуған илеңде, ереңде һаҡлап үлгәнең артыҡ. Көстәр тигеҙ булмай. Дошмандар ҙа ҡырыла. Ялыҡ бейҙең сая бөркөттәй ике улы ла ҡорбан була. Бормаланып ятҡан ике исемһеҙ йылғаға улдарының Ҡармасан һәм Сәрмәсән исемдәре бирелә.

Ошондай тарҡау башҡорт ырыу-ҡәбиләләре тормошо тураһындағы "Бабсаҡ менән Күсәк", "Ек Мәргән" эпостарында ла шулай уҡ берәр генә ырыу вәкиле тороп ҡалған була. Шулай ҙа ул ырыу вәкилдәре йәш булып, уларҙың кәләш алып, ырыуҙарын артабан тергеҙеү мөмкинлеге бар. Ә бына Ялыҡ бей бер үҙе, оло йәштә. Шулай ҙа ил хәстәре менән йәшәгән бей: "Ләкин белегеҙ: мин һуңғы яу булмам!" - ти өмөт һәм ышаныс менән.

Бына ошолар Йәлил Сөләймәновтың "Һуңғы уҡ" тигән һүрәтенең нигеҙенә һалынғандыр, тием. Һүрәттә башҡорт батыры Ялыҡ бей уҡ-һаҙағын алып, ҡалҡан кеүек, йорт-ерен, урман-тауын, Тыуған илен һаҡлап, һуңғы тамсы ҡаны ҡалғансы, һуңғы уғын дошмандың йөрәгенә тоҫҡап көрәшә. Көстәр тигеҙһеҙ, уға ҡаршы меңәрләгән уҡтар атылған, ләкин һуңғы һартай үҙ урынынан ҡуҙғалмай. Яугирҙең мөһабәт һыны уның тирмәһен (йәғни ғаиләһен), ағасы - ҡарағасын, тауҙарын, әруахтарын, ҡәберлектәрен ҡаплай. Һүрәттең идеяһы шундай: дошман ниндәй генә төҫтә һәм күпме генә булмаһын, башҡорт ҡулына уҡ-һаҙағын алып, барыбер Уралын һаҡлаясаҡ. Һүрәт киҫәтә лә: ярым-ярты, берәм-һәрәм генә булып, уҫал дошманға ҡаршы сығыу - ул үлем менән бер. Ил өсөн, йорт-ер, тел өсөн көрәштә бөтөн халыҡҡа ойошоу кәрәк. Ана бит, дошман уҡтары нисек аяуһыҙ уға йүнәлгән. "Күмәкләгән яу ҡайтарған" ти халыҡ мәҡәле.

Тарихи темаға арналған булһа ла, минеңсә, был һүрәт хәҙер ҙә бик актуаль. Сөнки илебеҙҙе, еребеҙҙе яйлап-яйлап килмешәктәр баҫып алып бара. Ауылдарҙа мәктәптәр ябыла, башҡорт телен уҡытыу ҙа ата-әсә теләге аша ғына бойомға ашырыла. Бына ниндәй уйҙарға һалды мине Йәлил Сөләймәновтың был һүрәте. Рәссам бик мәшһүр картина яҙған. Афарин!

**Әлфиә ЗӘБДИНОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Бер һүрәткә ҡарап" конкурсы гәзит уҡыусыларыбыҙҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Һынлы сәнғәт, нисектер, күмәк халыҡтың иғтибарынан ситтәрәк торған өлкә кеүек булып тойолһа ла, улай уҡ түгел икән. Редакцияға килгән хаттар шуны раҫлай. Конкурстың шарттарына өҫтәп, шуны ла әйтмәксебеҙ: жюри составында һүрәттәре баҫылған рәссамдар ҙа ҡатнашасаҡ һәм улар еңеүселәргә үҙҙәренең эштәрен бүләк итер, тигән өмөттәбеҙ.**

**Ғинуар башында Өфө тамашасылары алдында Мәскәүҙән "Алтын Ай" башҡорт бейеү коллективы сығыш яһаны. Башҡорт тарихын, мәҙәниәтен ситтәргә танытыу маҡсатына хеҙмәт иткән был коллектив яҡташыбыҙ, һөнәре буйынса бейеүсе Нәзир Байегетовтың фиҙаҡәрлеге һәм тырышлығы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Әлеге сығыштарынан һуң Нәзирҙе ижадханабыҙға саҡырҙыҡ. Мәскәү һынлы ерҙә үҙ көсөң менән бейеү коллективы булдырыу һәм уның эшен юғары кимәлдә ойоштороуҙың ауырлығын, әлбиттә, ул үҙе генә беләләр, шулай ҙа энтузиаст һәм илһөйәр егеттең үҙенең һәм коллективының ижад һулышын тойомлап ҡарайыҡ, булмаһа. Шулай итеп, һүҙ - Нәзир БАЙЕГЕТОВҡа.**

# МИЛЛИ МӨХИТЕБЕҘ...

## Мәскәүҙә лә булһын, тип



### Йәшлек - мөмкинлектәр осоро

Мәскәү - ул ҙур мөмкинлектәр ҡалаһы, тигәнде ишеткәнегеҙ барҙыр. Бында бер талай дөрөҫлөк бар. Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамблендә бер-нисә йыл бейеп, Санкт-Петербургта әрме хеҙмәтендә булдым, шунда бейеү ансамблендә бейенем. Бейеүселәр араһында, үҙен ихтирам иткән һәр бейеүсе илдең көслө коллективтарында үҙен һынап ҡарарға тейеш, тигән бер фекер бар. Ошо хыялымды тормошҡа ашырыу өсөн әрме хеҙмәтенән һуң Мәскәүгә юл тоттом һәм әлеге мәлдә РФ Эске эштәр министрлығының Йыр һәм бейеү академик ансамблендә бейеп йөрөйөм.

Фәйзи Ғәскәров исемендәге ансамблдең программаһы киң, йәғни башҡорт бейеүҙәренән тыш, бик күп башҡа халыҡтар бейеүҙәрен башҡарыу техникаһы ла юғары унда. Шуға ла икенсе ансамблдә бейеп китеүе ауыр булманы. Ә шулай ҙа ҡаныма, рухыма һеңгән башҡорт бейеүен башҡарыуы үҙе бер ләззәт булып тойола миңә. Ә Мәскәүҙәге мин бейегән ансамбль репертуарында бындай мөмкинлек юҡ. Шуға ла милли мөхитте алыштырып, сит ергә ерегеп китеү ауырлығын үтеп, төрлө көнкүреш мәсьәләрен хәл иткәс, Мәскәүҙәге башҡорт балаларынан һәм башҡорт студенттарынан башҡорт бейеүҙәре ансамбле ойошторорға, тигән хыялымды тормошҡа ашырырға тотондом. Энтузиазмдан бигерәк, сит ерҙә лә үҙ милли мөхитеңде булдырыу теләге быға этәргәндер, моғайын.

### Ситтәр ҙә беҙҙе танынһын, тип...

Рәсәй - ул күп милләтле дәүләт, шуға ла баш ҡалала төрлө милли ансамблдәр, милли коллективтар ойошторолоуына аптырарға түгел. Улар өсөн төрлө фестивалдәр үтеп тора, концерттар ойошторола. Шундай саралар҇ҙа Башҡортостан исеменән сығыш яһарға кәрәк булғанда Мәскәүҙәге яҡташтар ойошмаһы мине бейергә саҡыра торғайны. Шул ваҡытта "Ни өсөн Мәскәүҙә башҡорт коллективтары юҡ һуң?" тигән уй борсой башланы. Республикала милли коллективтар менән бер кемде лә аптыратып булмай, етмәһә, уларҙың үсешен тәьмин итеүсе саралар ҙа бихисап. Мәҫәлән, "Байыҡ" телевизион бәйгеһен мин шундайҙар рәтенә индерәм. Ә республиканан ситтә беҙҙе, башҡорттарҙы, беҙҙең сәнғәтте, мәҙәниәтте белеп еткермәйҙәр. Был Рәсәй халҡының наҙанлығынан килә, тип кенә лә ғәйепләп булмайҙыр. Илдә йәшәүсе милләттәрҙең кеме тураһында Үҙәк телевидение аша берәй тапшырыу йә фильм ҡарағанығыҙ бар? Үҙәк гәзиттәр ҙә был турала яҙып бармай. Тарих китаптарында ла юҡ беҙҙең турала мәғлүмәт. Шуға беҙҙе белмәгәндәренә аптырап та булмайҙыр. Әрмелә хеҙмәт иткән саҡта "Һин бында сит ил паспорты менән хеҙмәт итәһеңме?" тип тә һорай торғайнылар. "Эйе, беҙҙең милли валютабыҙ - евро", тиһәң дә ышаналар ине. Башҡорттар ҡайҙалыр тауҙарҙа, тирмәләр ҡороп көн күрә, тип уйлағандар ҙа булды. Шуға ла, Мәскәүҙә башҡорттоң кемлеген, уның ниндәй сәнғәтҡә, мәҙәниәтҡә эйә икәнен күрһәтеү өсөн мотлаҡ бер бейеү коллективы ойошторорға кәрәк, тигән ҡәтғи ҡарарға килдем. Төп эшемдән тыш, бер спорт-кл итеү үҙәгендә Мәскәү балалары өсөн бейеү түңәрәге алып бара башланым. Үҙәк етәкселәренә үҙемдең шартымды ла ҡуйҙым: ошо түңәрәк менән бергә башҡорт бейеү түңәрәге лә ойоштором. "Алтын Ай" ансамбле шулай барлыҡҡа килде.

Ансамблгә кеше йыйыуы еңел булманы. 2011 йылдың көҙөндә иғлан биргәйнем, бер ай дауамында бер ғаиләнән ике генә бала килде. Башта улар менән шөғөлләндек. Шунан яйлап балалар, унан һуң студенттар йыйыла башланы. Әлеге мәлдә ансамблдә 16 студент һәм 7 бала бейей. Мин шуға инана барам: мәҙәниәт аша тыуған илгә һөйөү тәрбиәләү - ул үҙен аҡлай торған иң дөрөҫ юл, ә коллектив быны "бишле"гә үтәй. Ансамблгә килгәндә башҡорт телендә һөйләшә белмәгән балалар хәҙер туған телдәрендә аралашырға өйрәнде.

### Беҙҙе Башҡортостанда ла танһындар ине

Былтыр март айында "Алтын Ай" коллективы менән Мәскәүҙә айырым концертыбыҙҙы ойоштороуға өлгәштек. Был беҙҙең тәүге уңышыбыҙ булды. Майҙа Санкт-Петербургҡа барҙыҡ, унда ла урындағы "Аманат" яҡташтар ойошмаһы ярҙамында айырым концерт бирҙек. Икенсе көнөндә "Блистательный Петербург" тигән концертта "Гөлнәзирә" бейеүе менән ҡатнаштыҡ. Яңы йыл алдынан Үҙәк телевидениела "Мөғжизәләр яланы" тапшырыуында ла ошо "Гөлнәзирә" бейеүе менән сығыш яһаныҡ.

Ошо бәләкәй генә уңыштарҙан һуң Өфө тамашасыһына ла үҙебеҙҙе күрһәтергә ваҡыт етте, тип уйлап, 5 ғинуарҙа "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһының Мәҙәниәт үҙәгендә сығыш яһарға батырсылыҡ иттек. Әлбиттә, Яңы йыл байрамы мәле булғанлыҡтан, күп итеп тамашасы йыя алманыҡ, шулай ҙа был концерттан барыһы ла - килгән тамашасы ла, беҙ үҙебеҙ ҙә ыңғай тойғолар менән таралыштыҡ. Төрлө саҡырыуҙар алдыҡ. Беҙҙе бигерәк тә Рита Өмөтбаеваның Башҡортостан юлдаш телеканалының "Байыҡ" телевизион бәйгеһендә ҡатнашырға саҡырыуы шатландырҙы.

Мәскәүҙә лә хәҙер беҙҙе беләләр, төрлө фестивалдәргә саҡырып торалар. Мәскәү беҙҙе үҙ итеп торғанда, республиканан да ниндәйҙер иғтибар булыуын бик теләр инек. Мәҫәлән, беҙгә костюмдар мәсьәләһен хәл итеүе ауырыраҡ. Ярай әле был йәһәттән атайым гел ярҙам ҡулы һуҙа.

### Сәхнә - йәшәүебеҙ мәғәнәһе

Әйткәндәй, атайым республикала шулай уҡ бейеүсе тигән дан алған кеше. Ваҡытында Фәйзи Ғәскәров ансамбле эргәһендә студия булған, унда ике йыл буйына шөғөлләнеп, профессиональ бейеүсе кимәленә еткәндән һуң ғына бейеүселәрҙе ансамблгә күсергәндәр. Атайым Нияз Байегетов бына ошо студияны тамамлаған. Тик ансамблдә ҡалмаған, ғаилә хәле буйынса тыуған яғына - Баймаҡ районына ҡайтып киткән. "Йылайыр" совхоз-техникумында "Йәйғор" тигән ансамбль ойоштороп, оҙаҡ йылдар шунда эшләне. Ансамблдең балалар, уҡыусылар һәм студенттар составы бар ине. Мин бәләкәй саҡтан шул ансамблдәрҙә бейенем. Шуғалыр ҙа, мәктәпте тамамлағас, уҡырға ҡайҙа барырға икән, тигән һорау торманы - Учалы сәнғәт училищеһын тамамланым. Ҡустымды Р. Нуриев исемендәге хореография колледжында уҡыттылар, ул әлеге көндә Әстерхан дәүләт йыр һәм бейеү ансамблендә бейей. Ағайым Себерҙә йәшәй, шулай уҡ яҡташтар ойошмаһы ойоштороған ансамблдә бейей.

Ситтән ҡарағанда, бейеүсе һөнәренең ауырлығы тойолмайҙыр ҙа, әммә уны юҡҡа ғына шахтерҙар хеҙмәте менән сағыштырмайҙарҙыр. Шулай булһа ла, бейеү - минең йәшәү рәүешем, сәхнәһеҙ тормошомдоң мәғәнәһе юғалыр ине, моғайын. Ғаиләбеҙҙең бар ағзалары менән ошо уртаҡ маҡсат берләштерә лә инде.

### Дәүләт ансамбленә - дәүләт ҡурсыуы

Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбленең минең өсөн ысын тәжрибә мәктәбе булғанын онотмайым һәм уның яҙмышы менән ҡыҙыҡһынып торам. Үкенескә күрә, һуңғы осорҙа ансамблдең шәп бейеүселәре ситкә китә. Мин бергә бейегән егеттәрҙең ҡайһыһы "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамблендә бейей, кемдер сит ҡалаларға, өлкәләргә сығып китте. Китмәҫтәр ине, ансамблдә хеҙмәт хаҡы бик түбән, ул ҡуртымға фатир алып тороу өсөн дә етмәй ҡала.

Дәүләт ансамбленә дәүләт тарафынан иғтибар кәрәк. Әле Президент гранты алып, йылына бер тапҡыр бирелгән аҡсаға нимәләр эшләргә тырышалар. Ә бына Рәсәйҙең бер нисә бейеү коллективы РФ Хөкүмәте грантына эйә, уларға был аҡса йылдар буйына түләнеп тик килә һәм ул эш хаҡына арыу ғына өҫтәмә булып тора. Сәнғәтте, мәҙәниәтте бер тапҡыр бирелгән гранттар менән күтәреп булмай. Фәйзи Ғәскәровтың мираҫын тергеҙеү, яңы программалар эшләү яҡшы, әлбиттә, шулай ҙа иң тәүҙә эш хаҡын күтәреп, бейеүсе һөнәренең дәрәжәһен, абруйын арттырһалар, милли сәнғәтебеҙ ҙә юғары үрҙәргә артылыр ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Милли мәҙәниәт торошон республика коллективтары ғына түгел, ә "Алтын Ай" кеүек Башҡортостандан ситтә ойошторолған ансамблдәр ҙә билдәләй. Халыҡ бейеүҙәре менән ситтәрҙең һушын алабыҙ икән, тәү сиратта, Нәзир Байегетов кеүек үҙ мәнфәғәттәренән өҫкә күтәрелә белгән кешеләргә рәхмәтле булырға тейешбеҙҙер, моғайын. Хәйер, улайға китһә, беҙҙә һәр сәнғәт төрөн йышыраҡ ана шундай энтузиазм менән яныусы кешеләр һаҡлап килә кеүек. Нисек кенә булмаһын, Рәсәйҙә һәм республикала иғлан ителгән Мәҙәниәт йылы милли мәҙәниәт өлкәһендә яңы балҡыштар һәм бөгөнгө геройыбыҙға ла ижади уңыштар алып килһен.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Асыҡланыуынса, ҡатындары тиҙерәк тынысланып, килеп тыуған хәлде йәйға һалырға тырышҡан иштәр күпкә бәхетлерәк ғүмер кисергән. Хис-тойғолар, бигерәк тә асыу менән нәфрәт ғаилә тормошон юҡҡа сығарыу һәләтенә эйә.*



ИНТЕРНЕТТАН



## ҒАИЛӘ ТЫНЫСЛЫҒЫ - ҡатындар ҡулында

■ Яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, офис хеҙмәткәрҙәренең үҙ-ара электрон хат алышыуы эш мөхитенә кире йоғонто яһап ҡына ҡалмай, хеҙмәткәрҙәрҙең психик сәләмәтлегенә лә зыян килтерә. Kingston бизнес-мәктәбенең бер төркөм ғалимдары төрлө фирмаларҙа эшләүсе 28 кешенең электрон почтаһына ентекле анализ яһаған һәм яуап хәбәренең ниндәй төрө кире хис-тойғолар уятыуын асыҡлаған. Мәҫәлән, ниндәйҙер үтенескә эш ваҡытында яуап бирмәһәләр, был яуапһыҙлыҡ һәр кемдә асыу тойғолары уяталыр, моғайын. "Пинг-понг" һөҙөмтәһе йәки ике хеҙмәткәрҙең электрон почта аша тиҙ һәм ҡыҙыу әңгәмә алып барыуы, хатта бер-береһенең яуабын да көтөп тормауы ике яҡта ла стресс тыуҙыра, бындай әңгәмә мәғәнәһен юғалта. Шулай уҡ кем менәндер күҙмә-күҙ аралашып ултырғанда бер ыңғайы почта аша яҙышыу ҙа матур булмаған күренеш.

■ Тымыҡ океан психология мәктәбе доценты Лиана Блоктың яңы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, ғаиләлә тауыш сыҡҡан осраҡта ҡатындың үҙен нисек тотоуына күп нәмә бәйле. Тикшеренеүҙәр сиктәрендә Блок Берклиҙа урынлашҡан Калифорния университеты белгестәре менән бергә урта һәм оло йәштәге ғаилә иштәренең нисек мөнәсәбәттәр асыҡлауын анализлаған. Психологтар конфликттың сәбәбенә түгел, ә ике яҡтың килешеү процесына иғтибарҙы йүнәлткән. Асыҡланыуынса, ҡатындары тиҙерәк тынысланып, килеп тыуған хәлде йәйға һалырға тырышҡан иштәр күпкә бәхетлерәк ғүмер кисергән. Хис-тойғолар, бигерәк тә асыу менән нәфрәт ғаилә тормошон юҡҡа сығарыу һәләтенә эйә.

■ "Википедия" ирекле энциклопедияһының Рәсәй версияһы үткән йылда иң популяр һорауҙар рейтингын баҫып сығарған. Был исемлектә 1000 төрлө мөрәжәғәт иҫәпләнә. "Википедия"ның рус телле уҡыусылары араһында иң популяр бүлектәр булып ике социаль селтәр - "Бәйләнештә" һәм "Класташтар" тора. Тәүгеһен көнөнә 20 мең тапҡыр эҙләгәндәр. Өсөнсө урынды Рәсәй тураһындағы мәғлүмәттәр биләй. Дүртенсе позицияла - "Игра престолов" телесериалы. Сәйәсмәндәр араһында Владимир Путиндың биографияһы күптәргә ҡыҙыҡ - 11-се урын һәм көнөнә 7,3 мең һорау. Иосиф Сталин 26-сы урында. Дмитрий Медведев рейтингтың 281-се урынында.

■ Рухи сәләмәтлек нигеҙендә ябай ғына ҡағиҙәләр ята, тип белдерә белгестәр. Уның беренсеһе - кеше эшенә ҡыҫылмау. Донъяла бер төрлө фекер йөрөткән, бер төрлө булған кешеләр юҡ - Аллаһы Тәғәлә беҙҙе төрлө итеп яратҡан. Шуға ла үҙ дөрөҫлөгөңдө кешегә көсләп тағырға кәрәкмәй. Ғәфү итә һәм онота белеү - күңел тыныслығына өлгәшеү өсөн һөҙөмтәле сара. Тормош шул тиклем ҡыҫҡа, ҡасандыр кемдер һеҙҙе рәнйеткән өсөн йөрәктә таш йөрөтөү уны мәғәнәһеҙерәк итәсәк. Өсөнсө кәңәш - йәмғиәттә абруй яуларға ынтылмағыҙ. Донъяла эгоистар шул тиклем күп, шәхси мәнфәғәтен алға ҡуйыусы бер ҡасан да башҡаларҙы баһаламаясаҡ. Етмәһә, бөтөн яҡтан камил кешеләр булмай, шулай булғас, ни өсөн һеҙ үҙегеҙ кеүек үк кешенең маҡтауына лайыҡһығыҙ? Көнләшеү, башҡаларҙы үҙгәртергә тырышыу ҙа рухи тыныслыҡҡа эйә булырға ҡамаусалаясаҡ.

ҺАБАҠТАР

**Ҡөрьәндә "донъя" төшөнсәһе цивилизация һүҙенең синонимы булараҡ аңлатыла. Ғөмүмән, Ҡөрьән концепцияһында донъя һүҙе "хикмәт һәм аҡыл" мәғәнәһендә ҡулланыла. Тимәк, күҙ күрмәгән, тән һиҙмәгән хикмәттәрҙе аңлай һәм аңлата белеү - аҡыл эше. Хаҡ Тәғәлә аҡыл кимәлен һәммәбеҙгә лә тиң биргән - был ҡанун да Ҡөрьәндә яҙылған. Тимәк, аҡылдан тайпылыу - хәҡиҡәттән ситләшеү, тигән һүҙ.**

# ДОНЪЯЛАР НИ ӨСӨН ТАРҠАЛҒАН?



Шуға күрә һәр цивилизацияны, хәҡиҡәткә таянған аҡыллы кешеләрҙең берләшмәһе, тип аңларға кәрәк. Бындай ҡоролоштар тәүтормоштан алып бөгөнгө көнгә тиклем килә торған, юҡҡа сыға торған. Цивилизация йәшәйештең юғары үҫеш кимәле булыуға ҡарамаҫтан, уның айырым өлгөрөп етеү кимәлдәре бар. Һәр айырым кеше үҙ ғүмерендә балалыҡ, үҫмер, йәшлек, ирәйеү, балиғ булыу, аҡылға ултырыу арауығын үткән кеүек, кешелек донъяһы ла шундай юлдан бара һәм рухи яҡтан үҫешә.

Был фекерҙе шотланд фәйләсүфе Адам Фергюсон ошолай аңлата: "Бала саҡтан балиғ булғанса үҫеш юлын һәр индивид ҡына үтмәй, кешелек донъяһы ла ҡырағай тормоштан цивилизацияға табан үҫешә".

Аҡыл кимәле буйынса башҡаларҙан көсһеҙөрәк цивилизациялар, көрсөккә терәлеп, көслөрәктәренә юл биргән.

Һәр цивилизация мәҙәниәтһеҙ үҫешә алмай. Ә мәҙәниәт, үҙ сиратында, дини тәғлимәттәргә нигеҙләнә. Беҙ мәҙәни уңыштар тип күнеккән бөйөк сәнғәт әҫәрҙәре - статуялар, картиналар, әҙәбиәт өлкәһендәге уңыштар, хатта техник асыштар ҙа - Изге китаптарҙа яҙылған идеяларҙы тормошҡа ашырып, Аллаһы Тәғәлә яралтҡанды данлап барлыҡҡа килгән. Хаҡ Тәғәләне аңлау кимәле һәр асышҡа, һәр уңышҡа йоғонто яһаған. Мәҫәлән, Изге китаптарҙа образлы фекер аша бирелгән Аллаһ һүҙен христиан динендә иконалар (һүрәт-образдар) рәүешендә сағылдыралар. Диндә тыйылған ғәмәл булыуға ҡарамаҫтан, Аллаһты христиандар кеше сүрәтендә күрәләр. Был иһә яйлап кеше тәнен идеаллаштырыуға алып килгән. Яланғас тәнде һүрәтләү, таш һын аша данлау - шуның ғәләмәте. Христиан дине доктринаһына нигеҙләнгән көнбайыш мәҙәниәтендә был идея йәшәү рәүешенә әйләнгән һәм бөгөнгәсә сәнғәткә ҙур йоғонто яһай. Был Изге китаптарҙағы образдарҙы яңылыш аңлауҙан килә.

Дини тәғлимәтте мәҙәниәт аша тормошҡа ашырыу цивилизация үҫешенә кисектергеһеҙ йоғонто яһай. Әгәр ҙә Изге Китаптарҙы дөрөҫ аңламағанда, шул аң кимәленә таянған цивилизация, хатта техник уңыштар кимәленең юғары булыуына ҡарамаҫтан, көрсөккә терәлә һәм юҡҡа сыға.

Бына ошоно аңлатҡан бер нисә миҫал. Боронғо Египет үҫеш кимәленең юғары баҫҡысына тиклем күтәрелә: дәүләт төҙөй, халыҡ берҙәм монолит милләт булып формалаша, мәҙәниәте цивилизациялы ил кимәле торошона яуап бирә. Техник яҡтан үҫеше буйынса Боронғо Египет бөгөн дә хайран итерлек. Мәҫәлән, улар фотографияны белгән. Металл пластинкаларға төшөрөлгән фотоларҙағы сифатҡа өлгәшеү бөгөнгө техник кимәл өсөн дә ауырға тура килә! Фараондарҙың күҙ ҡараһының фотолары һаҡланған. Шул фотоларға ҡарап, боронғо табибтар фараондың һаулығы тураһында мәғлүмәт алған. Иридодиагностикала бөгөнгө табибтар шул уҡ ысулды ҡуллана. Тимәк, Египет медицинаһы юғары кимәлдә булған. Египетлылар хатта электрҙы ла белгән, тигән мәғлүмәт бар. Улар уны "илаһи ут" тип йөрөткән. Бәҡһәң, Боронғо Египеттың алфавиты үҙгәрештәр кисереп, боронғо грек алфавитына нигеҙ һалған. Аҙаҡ ул латин алфавиты аша Европаға күскән.

Фәнни мәғлүмәттәр билдәләүенсә, Боронғо Египеттың йәшәү дәүере алты мең йыл тәшкил итә! Үҫеш өсөн был аҙ ваҡыт түгел.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, шундай көслө дәүләт фараондың ғәскәрҙәре диңгеҙгә батырылғандан һуң бер нисә көн эсендә юҡҡа сыға. Башлыҡһыҙ һәм армияһыҙ тороп ҡалған ил башҡа халыҡтар менән ҡушыла, ассимиляцияға дусар була.

Ни өсөн шулай килеп сыҡҡан? Ни өсөн Египет яңы фирғәүен һайламаған, ғәскәр төҙөмәгән? Халыҡ бит юҡҡа сыҡмаған да баһа, етмәһә, административ учреждениелар ҙа һаҡланған? Яуап үтә лә ябай: Египет цивилизацияһы үҫеш кимләленең һуңғы нөктәһенә килеп терәлгән - фәнни-техник үҫештең һуңғы кимәленә түгел, ә рухи үҫештең һуңғы нөктәһенә еткән.

Был хәл нимәнән ғибәрәт һуң? Ул ысынбарлыҡ менән хыял араһындағы сикте тоймауҙан килә. Быны түбәндәгесә аңлатып була: египетлылар күҙгә күренмәгән Аллаһы Тәғәләне һүрәттәр, статуялар рәүешендә күҙ алдына килтерә башлаған. Инаныс юғалғас, Хаҡ Тәғәләгә ышаныс та бөткән. Иманһыҙ дәүләт халҡы бәндәләр уйҙырмаһына табынып йәшәй башлаған. Күп аллалыҡ та шулай хасил булған. Икенсе төрлө әйткәндә, жрецтар менән фирғәүендәр үҙҙәрен Аллаһ итеп тойған һәм аҡылға һыймаҫлыҡ, хәҡиҡәткә тап килмәгән ҡанундар буйынса йәшәй башлаған.

Боронғо Египет Аллаһы Тәғәлә тәғлимәтенә ышанған жрецтар культына таянған. Ышаныс барҙа ил сәскә атҡан, үҫешкән. Аллаһ тауышын ишетмәй, ерҙәге "аллаларға" табына башлағас, рухи яҡтан тарҡалыу башланған һәм физик яҡтан юҡҡа сығыу оҙаҡ көттөрмәгән.

Ошоларҙан сығып, һығымта яһарға була: Боронғо Египет цивилизацияһы Аллаһы Тәғәләне матдиләштерергә теләү арҡаһында юҡҡа сыҡҡан. Йәғни, күҙгә күренмәгән Хаҡ Тәғәләнең барлығы уларҙы ҡәнәғәтләндермәгән. Шуға күрә египетлылар Илаһи Көстө һүрәттәрҙә, статуяларҙа, сәнғәттең башҡа өлкәләрендә күҙгә күренгәндәй итеп сағылдыра башлаған. Был Аллаһ менән яҡындан, "күҙмә-күҙ һөйләшер" өсөн кәрәк булған.

Нәҡ шул мәлдән Египет халҡы аҙғын нәфсенең ҡолона әйләнеп, үҙҙәре теләгәнсә генә йәшәй башлаған. Был иһә кешене Аллаһ менән тиңләү, йәғни аҡылһыҙға әйләнеү, ысынбарлыҡҡа нәфсе күҙе аша ҡарау тигәнде аңлата. Әгәр ваҡытында

дауаламаһаң, аҡылдан тайпылғандарҙың киләсәге юҡ, улар физик яҡтан да тиҙ арала юҡҡа сыға. Һуңынан ошо уҡ хатаны боронғо гректар ҙа ҡабатлай. Уларҙа ла күп аллалыҡ хөкөм һөрә һәм кешеләр Зевс, Аполлон, Посейдон, Афина, Гера кеүек кеше-аллаларға табына башлай. Дөрөҫөрәге, аллаларҙың таш һындарына, картиналарына ғибәҙәт ҡыла. Боронғо Рим дә, ошо уҡ дини моделде, аллаларҙың исемдәрен генә үҙгәртеп, үҙҙәренә ҡулайлаштырып ҡабул итә һәм сәнғәт әҫәрҙәрендә сағылдыра. Цезарҙар иһә тормошта үҙҙәрен ерҙәге алла кеүек тоя башлай. Аллаһты онотоп, үҙ белдегенсә йәшәү арҡаһында улар хаҡ юлдан яҙа, әшәкелек һаҙына бата.

Балыҡ башынан серей: үҙ хакимдарының тәкәбберлеген күреп йәшәгән халыҡ та үҙен башҡа халыҡтарҙан өҫтөн күрә башлай. Былдай тормош, үҙ сиратында, йәшәү рәүешенә әйләнә, мәҙәниәткә йоғонто яһай. Рухи деградация шулай башлана. Мәғәнәһеҙ тормош солғауында йәшәгән йәмғиәттәр рухи яҡтан көсһөҙләнеп, ил эсендәге сыуалыштар һөҙөмтәһендә йә иһә баҫҡынсылар һөжүменә ҡаршы тора алмай, юҡҡа сыға.

Аллаһы Тәғәләне "маңлай күҙе менән күрергә" теләү бар бәләләрҙең башы. Боронғо майя цивилизацияһының юҡҡа сығыуы ла был ҡот осҡос аңһыҙлыҡҡа асыҡ миҫал. Майя индеецтары Аллаһы Тәғәлә менән аралашыу өсөн наркотик матдәләр ҡулланған һәм, тилереп, тәңреләренең һыны төшөрөлгән бағана тирәләй шөңгөрлө барабандар тауышына ҡырағай бейеүҙәрен башҡарған. Йәғни, Аллаһ менән һөйләшеү өсөн Уны яҡындан күрергә теләгәндәр. Был иһә динһеҙлектең төп билдәһе. Хаҡ Тәғәлә хәҡиҡәтенән тайпылып, майялар иллюзиялар донъяһында йәшәгән. Аллаһы Тәғәлә менән шул рәүешле аралашыу тоҡом насарланыуына һәм үҫеш көрсөгөнә алып килгән.

Асылда, майялар бик күп мәғлүмәткә эйә булған. Мәҫәлән, улар күк йөҙө яҡтыртҡыстарының хәрәкәтен белгән һәм шул белемдәренә таянып, уникаль календарь эшләгән. Улар ҡалалар һәм матур итеп биҙәлгән ғибәҙәтханалар төҙөгән. Әммә майяларҙың ауыл хужалығы бик примитив булған. Улар хужалыҡтарында күркә, өйрәк кеүек ҡош-ҡорттан башҡа бер нәмә лә аҫырамаған. Халыҡтың күпселеген тәшкил иткән ауылда йәшәүселәр башлыса кукуруз менән туҡланған. Ни өсөн тигәндә, майялар диненә ярашлы, кеше кукуруздан барлыҡҡа килгән һәм шуға күрә был аҙыҡ төп ризыҡ һаналған. Ысынында, кукуруз туҡлыҡлылығы буйынса бик ярлы аҙыҡ һанала. Халыҡ иҫәбе артҡан һайын, сәсеүлектәр урмандарҙы ҡырҡып киңәйтелгән. Шул рәүешле ерҙең уңдырышлығы түбәнәйгән. 810 йылдан алып 910 йылға тиклемге арауыҡта егерме тапҡыр ҡоролоҡ булған. 900 йылдағы ҡоролоҡ иһә үтә лә аяуһыҙ булған.

Икенсе төрлө әйткәндә, майялар Аллаһы Тәғәләнән ситләшкән һайын аҡылдан тайпыла барған! Тәбиғәт афәттәре йышайғас, халыҡ араһында жрец-монархтарға ышаныс та кәмегән. Бер-береһененең табышын тартып алыу өсөн ырыуҙар араһында ыҙғыштар көсәйгән. Аҙағы билдәле: аслыҡ, дәүләт власы юҡҡа сығыу, ырыу-ара һуғыштар, бушап ҡалған ҡалалар һәм мәҙәниәттең юҡҡа сығыуы. Ҡыҫҡаһы, иҡтисади коллапс!

Пасха утрауында йәшәгән аҫаба халыҡ менән дә шул уҡ хәл ҡабатланған. Улар алла-поттарҙы ҙур таш статуялар рәүешендә эшләгән. Тораташтарҙы утрауҙың урта өлөшөнән бүрәнәләргә һалып тәгәрәткәндәр. Шул маҡсатта урмандарҙы юҡҡа сығарғандар. Йәшеллек бөткәс, утрауҙы ҡош-ҡорт ташлап киткән, аҙыҡ запасы юҡҡа сыҡҡан. Әлбиттә, утрауҙа йәшәгән аборигендар ауыл хужалығы менән дә шөғөлләнгән, әммә урмандар кәмегәс, эрозия һөҙөмтәһендә тупраҡ уңдырышһыҙға әйләнгән. Халыҡ физик яҡтан үҙ-үҙен харап иткән. Бында ла халыҡ тораташтарға табынған жрецтарға ышанысын юғалтҡан, ырыу-ара һуғыштар көсәйгән һәм иҡтисади көрсөк уларҙы аяҡтан йыҡҡан.

1774 йылда утрауға килгән Джеймс Кук йонсоған, бәхетһеҙ дистрофиктарҙы ғына осратҡан...

Тарихта булған ошондай фажиғәләр беҙгә һабаҡ булырлыҡмы?

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# МЕҪКЕНЛӘНМӘЙЕК!

**"Мин кем инде?", "Минең уларға йоғонто яһай алырлыҡ туғандарым юҡ та инде", "Уның ата-әсәһе ниндәй вазифа биләй!", "Барыһын да ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ хәл итә..." - ошоға оҡшаш һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә. Етәкселәрҙе, сәйәсмәндәрҙе, байыраҡтарҙы, уңышлыраҡтарҙы әрләп тә, уларҙы Алланың "ҡашҡа тәкәһе" итеп күтәреп тә, ундайҙар эргәһендә үҙеңде түбәнерәккә төшөрөү кеүек ғәҙәт шул тиклем тәбиғи хәлгә әйләнгән. Әммә был меҫкенләнеү кеүек йөрәк сиренең бер сағылышы, үҙ дәрәжәңде, абруйыңды төшөрөү генә түгел микән?**



Эйе, үҙеңде "көсһөҙ", "сирле", "фәҡир", "йоғонтоһоҙ" итеп йәлләтеп, "рухи кинәнес" алыу еңел ул. Бәғзеләрҙең йәшәү ҡағиҙәһе лә был. Ғәйепте ете тау, ете диңгеҙ артында ятҡан кешегә япһарып, үҙеңде бар яуаплылыҡтан азат итеү өсөн күп аҡыл, көс, ныҡышмалыҡ кәрәк түгел дә инде. Шул уҡ ваҡытта меҫкенләнеп, үҙҙәрен йәлләтергә тырышып, "Был мине уратып алғандарҙа хөрмәт тыуҙыра", тип уйлағандар төптән хаталана. Был, киреһенсә, уларҙың абруйын ғына төшөрөүе мөмкин.

Меҫкенләнеү сағылышының төрҙәре күп, һәр кем анализлап, үҙеңдәге ошо һәм башҡа етешһеҙлектәрҙе барлай, уларҙы төҙәтә башлай ала. Эйе, ҡыйын, әммә кәрәк. Бәлки, бер мосолман зыялыһының түбәндә килтереләсәк һүҙҙәре, кәңәштәре быға ярҙам да булыр: "Үҙеңдең көсһөҙлөгөңә асыулан һәм үҙгәрергә тырыш, - тигән был аҡыл эйәһе. - Бүрәнә кеүек тәгәрәп ятҡан килеш, минең ҡулдан теге йәки был килмәй, тип зарланғанда, ысынлап та, бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ. Ауыр буласаҡ, әммә түҙ, ауырлыҡтар үтмәй тороп, нимәгәлер өлгәшеп булмай. Күңел төшөнкөлөгө, хәлһеҙлек ваҡыты менән аяҡтан да йығасаҡ, әммә йөрәгеңдә иман булһа, һин был ауырлыҡтарҙы зарланмайынса ғына, ҡыуанып үткәреп ебәрәсәкһең. Эйе, бәлки, ҡуйылған маҡсаттарыңдың барыһына ла өлгәшмәҫһең дә. Бәлки... Әммә үҙ баһаңды белеүең, тормошоңда осраған һынауҙарҙы лайыҡлы үтеүең һине меҫкен хәлгә төшөүҙән аралаясаҡ. Һин үҙеңде башҡаларҙан кәм тоймаясаҡһың, һин һүҙ аша үҙеңдең "бәләкәй, ауырыу, йоғонтоһоҙ" кеше булыуыңды хәтергә төшөрмәйәсәкһең. Кемдәлер "нәсихәтләү" йөҙөнән, уға көнләшеү менән ҡарамаясаҡһың, уның хаталарын эҙләмәйәсәкһең.

Аҡламағыҙ үҙегеҙҙе, йәлләмәгеҙ, аҙымлап камиллаша башлағыҙ. Бының өсөн әле булған белемегеҙҙең кимәле лә, йәмғиәттә тотҡан урынығыҙ ҙа, йәшегеҙ ҙә мөһим түгел. Эйе, "мин булдыра алмайым", "мин меҫкен", "бахырмын", тип йәшәүе еңел. Әммә дөрөҫмө? Аллаһы Тәғәләнең һәр кемгә тәғәйен ризығын биреүен онотмағыҙ. Фәҡирлектә йәшәп тә, үҙҙәренең бәләкәй генә йорттарына батшаларҙы рөхсәтһеҙ индермәгән аҡыл эйәләрен хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ. Мең бәләләргә дусар ителеп тә, бар ғаләм үҙҙәренә ябырылғанда ла дәрәжәләрен юғалтмайынса, ошо ғаләмде үҙгәртә, йүнәлтә һәм етәкләй алған бөйөк шәхестәрҙең тормошо һеҙгә өлгө булһын. Йә, меҫкенләнәсәкһегеҙме бынан һуң? Мөхәммәт бәйғәмбәр: "Кеше арыу, күңелһеҙләнеү, эс бошоу, һағыш, рухи ғазаптар тойғоһо менән килешмәһә һәм улар артынан эйәрмәһә, Аллаһы Тәғәләнең бәрәкәтенән мәхрүм ителмәйәсәк", тигән. Аллаһы Тәғәлә һәр кемгә бәрәкәтен, ризығын бирә, йә, ошо бәрәкәткә, ниғмәттәргә эйә була тороп та меҫкенләнәсәкһегеҙме артабан да?

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Егерме туғыҙынсы көн

**Беренсе бүлек: аҡыл. Тағы ла иғтибар туплау тураһында**

Был программала бик йыш тормошта камиллыҡҡа өлгәшеү өсөн иғтибар туплауҙың мөһимлеге һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Көслө иғтибар туплау һәләте һеҙҙең менән идара итергә тырышҡан уйҙарҙы контролләргә мөмкинлек бирә. Бынан һуң, ыңғай һәм сәләмәт уй-фекерҙәр өҫтөнлөк алһын өсөн кире һәм зыянлыларын ҡыуырға мөмкин. Ыңғай һәм нигеҙле уйлап һәм фекерләп һеҙ нимәгә һәләтлеһегеҙ, шуға өлгәшеү энергияһына һәм теләгенә эйә буласаҡһығыҙ. Әгәр ғүмер ахырына тиклем хәтерҙә тоторға кәрәкле ниндәйҙер сер булһа, ул шунан ғибәрәт: ысын бәхеткә һәм аң тыныслығына өлгәшеп була. Үҙеңдә иғтибар туплау сәнғәтен күнектереп, хозур торошҡа өлгәшергә мөмкин.

**Икенсе бүлек: тән. Аҡыл өсөн аҙыҡ**

Хәҙер бер кем дә аҙыҡ-түлектең мейе торошона йоғонто яһауы менән бәхәсләшмәй. Күп итеп ит һәм башҡа ауыр үҙләштерелеүсе ризыҡты ашай башлағыҙ - үҙегеҙҙә ялҡаулыҡ, реакцияғыҙ һүлпәнәйеүен тойорһоғоҙ. Еңел ризыҡ, атап әйткәндә, йәшелсә, емеш-еләкте күберәк ҡулланһағыҙ, тиҙҙән сикһеҙ энергия тойорһоғоҙ, саманан тыш иғтибарлы булырһығыҙ, аңығыҙ йәнләнер. Ҡайһы бер ризыҡ күңел торошона туранан-тура йоғонто яһай. Шуға күрә, мейегеҙ үҙе лайыҡлы булған иң яҡшы "яғыулыҡ" алһын өсөн нимә ашағанығыҙҙы контролдә тотоғоҙ.

24 сәғәт эсендә ашаған барлыҡ аҙыҡ-түлектең исемлеген яҙығыҙ. Һуңынан майлы аҙыҡты мөмкин тиклем икенсе ризыҡ, шоколад кәнфиттәрен һәм бутербродтарҙы емеш-еләк һәм йогурттар менән алыштырығыҙ. Ҡыҙыл ит ашауҙы мөмкин тиклем сикләгеҙ, сөнки ул оҙаҡ эшкәртелә һәм быны өсөн күп энергия талап итә. Нимә ашарға икәнлеген билдәләгәс, туҡланыу сифатын, тимәк, физик торошоғоҙҙо яҡшыртыу буйынса маҡсатлы эшмәкәрлек алып барыуы еңелерәк буласаҡ.

**Өсөнсө бүлек: характер. "Төркөм генийы"ның мөһимлеге**

"Төркөм генийы" - эшлекле даирәләрҙә ҡулланылған аңлатма. Ул бергә йыйылып, бер-береһенә илһам биреп, дәртләндереп, яңы идеяларҙы "мейе һөжүменә" дусар итеү һәм бер-береһенә һәр яңы башланғыста ярҙам итеп тороусы кешеләр төркөмөнә ҡарата ҡулланыла. Әйҙәгеҙ, бөгөн шәхси "төркөм генийы"н булдырыуҙы планлаштырайыҡ. Үҙегеҙ яҡшы белгән билдәле һәм ыңғай ҡарашлы, ҡуйған маҡсаттарына өлгәшергә ныҡлы ҡарар иткән, яңы идеяларға асыҡ һәм үҙегеҙ тулыһынса ышанған дүрт кешене атағыҙ. Улар менән "төркөм генийы" концепцияһы буйынса фекер алышығыҙ һәм ике аҙнаға бер тапҡыр булһа ла осрашырға планлаштырығыҙ. Ошо осрашыуҙар ваҡытында шәхси камиллыҡҡа өлгәшеү, ҡыҙыҡлыраҡ, дәртлерәк йәшәү ысулдарын, ваҡытыңды ойоштороу һәм финанс уңышҡа өлгәшеү принциптарын эҙләүгә йүнәлтелгән "мейе һөжүме" сеанстары үткәрегеҙ. Бер-берегеҙҙе дәртләндерегеҙ һәм берҙәмлек энергияһын (синергизм) быға саса төшөгөҙҙә лә күрмәгән бейеклектәргә үрләү өсөн файҙаланығыҙ. "Төркөм генийы" - яңы тормош башлау һәм ошо йүнәлештә барыу өсөн иң ҡеүәтле ресурстарҙың береһе.

**Робин ШАРМА.**



## 27 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы". Ток-шоу (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Ладога". Военно-драматический сериал. 1-я и 2-я серии (16+).
23.30 Ночные новости.
23.40 "Познер" (16+).
00.40 "Большой". Комедия (16+).
02.35, 03.05 "Горячие головы" (16+).
03.00 Новости.
04.20 "Контрольная закупка" (12+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Восход Победы. Падение блокады и крымская ловушка" (12+).
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30, 19.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Женское счастье". Ток-шоу.
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Папа в законе". Детективный сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Две зимы и три лета". Драматический сериал (12+).
23.45 "Специальный корреспондент"
00.50 "Девчата". Ток-шоу (16+).
01.30 "Противостояние". Детективный сериал (16+).
01.00 "Визит к Минотавру". Сериал
02.55 "Закон и порядок-18" (16+).
03.45 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Мөслим Әбсәләмов (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Урғала". Фильм-концерт (6+)
18.00 "Еңмеш". Фильм (0+)
21.00 "Кис ултырып". Азалия һәм Урал Рәшитов (6+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Новости недели (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 Новости недели (16+).**
**11.45, 02.00 "Эзель" (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**12.45, 06.15 "Весело живем" (12+).**
**12.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.00 "Новости недели" (16+).**
**14.45 "Автограф" (6+).**
**15.15 "Бауырһаҡ".**
**15.45 "Физ-ра".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**16.45 "КЛИО" (6+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 Хоккей. Чемпионат КХЛ. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). В перерывах: Новости (на башк. яз.).**
**20.30 "Позывной "Барс" (12+).**
**20.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (6+).**
**23.00 "Башкортостан начинается здесь"**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**03.30 Ф.Кроммельник "Великолепный рогоносец" (12+).**
**06.00 "Орнамент".**

## 28 ЯНВАРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы". Ток-шоу (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Ладога". 3-я и 4-я, заключительная, серии (16+).
23.30 Ночные новости.
23.40 "Голоса". 1-я часть. Док. фильм
00.50 "Приговор". Драма (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Горячие головы-2" (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.30 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Женское счастье".
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10, 19.40 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Папа в законе". Сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Две зимы и три лета". Драматический сериал (12+).
23.45 "Нарисовавшие смерть. От Освенцима до Нойенгамме" (16+).
00.50 "Тайны Первой Мировой. Друзья - Враги" (12+).
01.45 "Благотворительный концерт "Помним всех".
03.30 "Противостояние". 2-я серия. Детективный сериал.
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Гүзәл Маликова
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Салауат Низаметдинов. Концерт
21.00 "Кис ултырып". Фәрүәз Урманшин (6+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Зеркальце".**
**11.00, 00.15, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 05.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**12.45, 06.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Хазина" (6+).**
**15.15 "Книга сказок".**
**15.45 "Борсаҡ".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 21.15, 06.30 "Полезные новости"**
**18.00 "Үткән ғүмер. 1970-е годы" (6+).**
**18.45 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр" (12+).**
**21.00 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Көндәлек" (6+).**
**23.30 "Главное на Земле - Человек!"**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 "Сумасшедший дом" (12+).**

## 29 ЯНВАРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы". Ток-шоу (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Линия Марты". 1-я и 2-я серии (16+).
23.30 Ночные новости.
23.40 "Голоса".
00.45 "Жизнь хуже обычной". Комедия
02.45, 03.05 "Дневник слабака-2: правила Родрика" (12+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Когда наступит голод". Док. фильм (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Женское счастье". Ток-шоу.
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Папа в законе". Сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Две зимы и три лета". Сериал
23.45 "1913-й". Док фильм.
00.45 "Прощение" (12+).
02.15 "Противостояние". 2-я и 3-я серии. Сериал.

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Фәрит Амантаев (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Урал моңо-2012". Концерт (6+)
20.00 "Көндәлек" (6+)
21.00 "Кис ултырып". "Арғымаҡ" төркөмө (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00, 00.15, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45, 06.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45, 05.30 "Башҡорт йыры" представляет..." (12+).**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров".**
**15.45 "Семәр".**
**16.00 "Городок АЮЯ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 Хоккей. Чемпионат КХЛ. В перерывах: Новости (на башк. яз.).**
**20.30 "Позывной "Барс" (12+).**
**20.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "ФК "Уфа": даешь премьер-лигу!"**
**22.00 "Историческая среда".**
**23.00 Диспут-клуб "Пятый угол" (16+).**
**23.45 "Он был не только антропологом..." (6+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 Ф.Буляков "Заноза" (12+).**

## 30 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы". Ток-шоу (16+).
16.10, 03.15 "В наше время".
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Линия Марты", 3-я и 4-я, заключительная серии (16+).
23.30 Ночные новости.
23.40 "Политика" (18+).
00.45, 03.05 "По версии Барни". Мелодрама (16+).
03.00 Новости.
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "От всей души".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Женское счастье". Ток-шоу.
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Папа в законе". Сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Две зимы и три лета". Драматический сериал (12+).
22.50 "Поединок" (12+).
00.25 "Золотой орел". XII Торжественная церемония вручения Национальной кинематографической премии.
01.30 "Противостояние". Сериал.
02.50 "Закон и порядок-18" (16+).
03.45 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Фирзинә Абдуллина (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Дуҫлыҡ күпере". Концерт (6+)
21.30 "Башҡорт йыры". Концерт (2013й.) (6+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Царь горы"**
**11.00, 18.00, 00.15, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15, 06.00 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк.яз.).**
**12.45, 01.45, 06.15 "Весело живем"**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Автограф".**
**15.15 "Ғәләмәт донъя".**
**15.45 "Шәп арба".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "ФК "Уфа": даешь премьер-лигу!"**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 21.15, 06.30 "Полезные новости"**
**18.15 "Сәләм+" (12+).**
**18.45 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр" (12+).**
**21.00 "Лото 6 из 40+. Джокер".**
**22.00 "Аль-Фатиха".**
**23.00 "Баик" представляет..."**
**23.45 "Песни моего народа" (12+).**
**01.00 "В зимний вечер".**
**03.30 Х.Вуолийоки "Чужая звезда". Спектакль (12+).**

## 31 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы" (16+).
16.10 "В наше время" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес".
21.00 "Время".
21.30 Новый год на "Первом" (16+).
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 "Черный лебедь". Триллер. (16+).
02.15 "Миссис Даутфайр". Комедия (12+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.10 "Ауаз".
10.05 "О самом главном".
11.00, 14.00 "Вести".
11.30, 14.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал
13.00 "Особый случай" (12+).
14.15 Дневник Сочи-2014.
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Женское счастье".
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Смеяться разрешается".
18.30 "Прямой эфир".
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Короли смеха". Юмористическая программа (12+).
23.05 "Живой звук". Музыкальное шоу.
00.30 "ХХ лет на сцене". Концерт Дианы Арбениной и группы "Ночные снайперы".
02.30 "Честный детектив" (16+).
03.05 "Противостояние". Детективный сериал, 5-я, заключительная серия.
04.25 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Риф Арыҫланов (6+)
11.35 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йома" (0+)
19.00 "Наҙға төрөнөп". Хәлимә Ғәббәсова концерты (6+)
21.15 "Кис ултырып". "Наза" дискотекаһы. 2011й. (6+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ғәләмәт донъя".**
**11.00, 00.15, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**12.45, 06.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45, 05.30 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Автограф".**
**15.15 "Зеркальце".**
**15.45 "Сулпылар".**
**16.00 "Байтус" (6+).**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Дипломанты" (12+).**
**17.00 "История признания" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**18.45 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр" (12+).**
**21.00 "Попкорм" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Дарман".**
**23.45 "Песнь курая" (12+).**
**01.00 "В минуты отдыха" (12+).**
**03.30 А.Яхина. "Лебедушка моя". Спектакль (12+).**

## 1 ФЕВРАЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
04.50, 06.10 "Отряд особого назначения". Худ. фильм (12+).
06.00 Новости.
06.15 "Земля с высоты птичьего полета".
07.35 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб". "София Прекрасная".
08.35 "Смешарики. Новые приключения".
08.50 "Умницы и умники" (12+).
09.35 "Жизнь в служении". К 5-летию интронизации Патриарха Московского и всея Руси Кирилла.
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Александр Пороховщиков. Пойми и прости..." (12+).
12.10 "Идеальный ремонт".
13.00 "Непокоренные". Док. фильм (16+).
14.00 "Ленинград". Военно-драматический сериал. 4 серии (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.15 "Минута славы. Дорога на Олимп!" (12+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым".
23.00 Юбилейный вечер. К 70-летию школы-студии МХАТ.
00.50 "Безумное свидание". Комедия (16+).
02.25 "Военно-полевой госпиталь". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
04.40 "Русское поле". Драма.
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Вести. Дежурная часть".
11.55 "Честный детектив" (16+).
12.25 "Расплата за любовь". Мелодрама (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Субботний вечер".
16.40 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным.
17.45 "Кривое зеркало. Театр Евгения Петросяна" (16+).
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Дождаться любви". Мелодраматический сериал (12+).
00.40 "Любовь на сене". Мелодрама (12+).
02.45 "Горячая десятка". (12+).
03.55 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 Ҡәҙим Аралбаев тураһында тапшырыу (6+)
11.50 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Миҙгелдәр". Нурия Абдуллинаның концерты (2012й.) (6+)
18.00 Рәүилә Мәсәлимова. Концерт (6+).
21.00 "Был тылсымлы донъя ". Гөлсөм Бикбулатова(6+)

### БСТ
**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.45 "Царь гусей". Спектакль.**
**09.30 "Сәләм+" (12+).**
**09.45 "Көндәлек" (6+).**
**10.15 "КЛИО" (6+).**
**11.00 "Здоровое решение" (12+).**
**11.30 "Аль-Фатиха".**
**12.00 "Следопыт" (6+).**
**12.45 "Үткән ғүмер. 1970-е годы" (6+).**
**13.15 "Замандаштар" (6+).**
**13.45, 06.30 "Весело живем" (12+).**
**14.00 "Дарю песню".**
**16.15 С.Хусаинов. "Белое платье матери". Спектакль (12+).**
**19.00 "Башкорттар".**
**19.30 "Хазина".**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Еду я в деревню".**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Любимое дело" (12+).**
**21.30 "Новости" (на русск.яз.).**
**22.00 "Баик-2013". Гала-концерт.**
**01.30 "Любовь и звезды". Фильм-концерт (16+).**
**03.00 Н.Асанбаев. "Райса+Файзи". Спектакль (12+).**
**06.00 "Автограф" (6+).**

## 2 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
04.50, 06.10 "Зимний вечер в Гаграх". Худ. фильм.
06.00 Новости.
06.35 "Земля с высоты птичьего полета".
07.40 "Служу Отчизне!"
08.15 "Дисней-клуб". "София Прекрасная".
08.40 "Смешарики". "ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Белое солнце пустыни". Приключения.
13.55 "Екатерина Максимова. Великая" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время для двоих". Мелодраматический сериал. (16+).
19.10 "Кубок профессионалов". 4-й выпуск ледового шоу.
21.00 "Воскресное "Время".
22.00 "Повтори!" Пародийное шоу (16+).
00.20 "Знакомство с факерами-2". Комедия (16+).
02.10 "Кабинетный гарнитур". Худ. фильм.
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.10 "Один из нас". Боевик.
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Городок. Дайджест".
11.45, 14.30 "Черная метка". Драматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
16.05 "Смеяться разрешается".
18.00 "Букет". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести недели".
21.30 "Я буду рядом". Мелодрама(12+).
23.30 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
01.20 "Американка". Мелодрама (12+).
03.20 "Планета собак".
03.50 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Автограф". Фәнил Күзбәков (6+)
11.50 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары янғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Ҡоҙаса". Спектакль (6+)
19.00 "3:0". Рәил Өмөтбаев (+6)
21.00 "Кис ултырып". Илсур Тайсин

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30 "Йома".**
**09.00 "Еду я в деревню".**
**09.30 "Автограф" (6+).**
**10.00 "Бауырһаҡ".**
**10.15 "Городок АЮЯ".**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Шәп арба".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.15 "Семәр" (6+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30, 21.30 Новости недели.**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башкорттар".**
**14.00 "Дарю песню".**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Замандаштар" (6+).**
**16.45 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа" (6+).**
**17.00 "Историческая среда".**
**17.30 "Покупай свое - выбирай родное" (12+).**
**18.00 "Орнамент".**
**18.30 "Специальный репортаж".**
**18.45 "Семәро козлят" (6+).**
**19.30 "История признания" (12+).**
**19.45 "Полезные новости" (12+).**
**20.00 "Любимое дело".**
**20.30 "Время спорта".**
**21.00 " Лото 6 из 40 +. Джокер".**
**21.15, 00.45 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**22.00 "Урал-батыр" (12+).**
**22.30 "Вечер.com" (12+).**
**23.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.15 "Автограф" (6+).**
**01.00, 06.30 "Единое время" (16+).**
**02.15 Документальный фильм.**
**03.15 Спектакль (12+).**
**06.00 "Попкорм" (16+).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# АУЫРҒАЗЫ РАЙОНЫ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**3-сө һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** 1. Йәһүҙин. 3. Ишморатов. 6. Шәрипов. 11. Татау. 12. Идеал. 13. Мотив. 14. Орган. 15. Ҡаптал. 18. Сөләймәнов. 21. Ғәбитов. 26. Садист. 28. Рефери. 29. Тин. 31. Алатыр. 33. Штатив. 34. Әрәсә. 35. Тәнҡит. 36. Микадо. 37. Ғәм. 39. Рауза. 42. Ишбаев. 45. Әминева. 47. Стандарт. 50. Ҡабырға. 55. Разин. 56. "Ротор". 57. Амати. 58. Уҡлау. 59. Айбулат. 60. Сәфәрғәлин. 61. Ҡашмау.

**Вертикаль буйынса:** 1. Йылмаяҡ. 2. Ихтимал. 4. Штурвал. 5. Ориноко. 7. Әйләнмә. 8. Вахитов. 9. Статус. 10. Серге. 16. Плед. 17. Ағас. 19. Йәһәт. 20. Әфйүн. 22. Буре. 23. Тәпе. 24. Усманова. 25. Директива. 27. Трактат. 28. Равиоли. 29. Иғәнә. 32. Рәт. 33. Шәм. 37. Ғазин. 38. Мунда. 40. Гоби. 41. Сүре. 43. Штаб. 44. Ахыр. 44а. Шәрипова. 46. Варшава. 48. Тәнзилә. 49. Тарауыл. 51. Айрауыҡ. 52. Айһылыу. 53. Азиат. 54. Сталин.

## КОТЛАЙБЫҘ!

Ошо көндәрҙә Ғафури районы Ҡормантау ауылында йәшәүсе апайыбыҙ **Лилиә Шәйәхмәт ҡыҙы Иваева** үҙенең күркәм байрамы - 55 йәшлек юбилейын билдәләй.

Лилиә апай - алсаҡ, егәрле кеше. Ул хәстәрлекле инәй, уңған ҡатын. Лилиә Шәйәхмәт ҡыҙы Эльвира, Венера исемле ҡыҙҙарына, Рауил улына ғүмер бүләк иткән. Бөгөнгө көндә Лилиә апай менән Юнир еҙнә өс балаһының ғаиләһенә, алты ейән-ейәнсәренә ҡыуанып йәшәй. Лилиә Шәйәхмәт ҡыҙына аҡ бәхеттәр, ныҡлы һаулыҡ, оҙон ғүмер, имен тормош теләйбеҙ.

**Ҡотлау менән Ғәлиә, Ләйлә, Гөлфиә, Зөлфиә, Ғайса Басировтар.**

* * *

Ғинуар айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Әлшәй районы** Ҡармыш ауылынан Миңлейән Ғәбделмәнов, **Ейәнсура районы** Малай Муйнаҡ ауылынан Ләйсән Аҫылбаева, Башҡорт Бармағы ауылынан Зәйтүнә Йомабаева, **Ғафури районы** Бәләкәй Үтәш ауылынан Х. Мөхәмәтйәнова, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Миләүшә Сафина, Мөхтәр Монасипов, Нәжип Дәүләтбирҙин, Хәлиҙә Ғәҙелшина, Фәниә Ишйәрова, Ишбирҙе ауылынан Миңнехәт Иҙелбаев, **Дүртөйлө ҡалаһынан** Рифа Хажиәхмәтова, **Бәләбәй районы** Баймырҙа ауылынан Земфира Үлмәҫколова, **Стәрлетамаҡ районы** Бигәнәш ауылынан Лилиә Моталлапова, Яңы Отрадовка ауылынан Альмира Сираева, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Гөлназ Яҡупова, **Миәкә районы** Илсеғол ауылынан Әлфирә Ниғмәтуллина, **Йылайыр районы** Ҡашҡар ауылынан Зәкиә Мостафина, Миңзәлә Сыңғыҙова, Юлдыбай ауылынан Рәйлә Айытҡолова, **Ишембай районы** Һайран ауылынан Зәйтүнә Иҫәнова, **Бишбүләк районы** Дим ауылынан Әлфиә Хәбибуллина, **Шаран районы** Шаран ауылынан Зиниә Диярова, Источник ауылынан Әлфирә Шәйехова, **Бүздәк районы** Сулпан ауылынан Дилбәр Әхтәмова, **Ҡырмыҫҡалы районы** Ҡырмыҫҡалы ауылынан Филарис Ҡусҡаров, Әминә Ҡусҡарова, **Ауырғазы районы** Зәйет ауылынан Фәнисә Бохармәтова, Мораҙым ауылынан Кинйәбикә Ситдиҡова, Айһылыу Лоҡманова, Гөлназ Фәйзуллина, Фәрзәнә Большакова, **Өфө ҡалаһынан** Гөлназ Мөхәмәтйәнова, **Туймазы районы** Серафимовка ауылынан Ильвира Зарипова, Собханғол ауылынан Айгөл Вәлиева, **Мәсетле районы** Юныс ауылынан Нәфисә Шакирова, **Федоровка районы** Динес ауылынан Лилиә Хәлитова, **Өфө районы** Ҡыҙылъяр ауылынан Нәсимә Хәйруллина, **Миәкә районынан** Әлфирә Ниғмәтуллина, **Хәйбулла районы** Йәнтеш ауылынан Сәлиҙә Көнсыуаҡова, Әбүбәкер ауылынан Хәсән Билалов һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Атыр таңдарығыҙ ҡояшлы, барыр юлдарығыҙ яҡты, башҡарған эштәрегеҙ бәрәкәтле, һәр көнөгөҙ һөйөнөскә бай, рухығыҙ ныҡ булыуын теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Ғинуар - февраль (Рабиғүл әүүәл - Рабиғүл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 27 (26) дүшәмбе | 8:47 | 10:17 | 14:30 | 17:11 | 18:41 | 20:11 |
| 28 (27) шишәмбе | 8:45 | 10:15 | 14:30 | 17:13 | 18:43 | 20:13 |
| 29 (28) шаршамбы | 8:44 | 10:14 | 14:30 | 17:15 | 18:45 | 20:15 |
| 30 (29) кесе йома | 8:42 | 10:12 | 14:30 | 17:17 | 18:47 | 20:17 |
| 31 (30) йома | 8:40 | 10:10 | 14:30 | 17:19 | 18:49 | 20:19 |
| 1 (1) шәмбе | 8:38 | 10:08 | 14:30 | 17:21 | 18:51 | 20:21 |
| 2 (2) йәкшәмбе | 8:37 | 10:07 | 14:30 | 17:23 | 18:53 | 20:23 |

*"Дини тәҡүим"дән алынды.*

ХОККЕЙ

# "АМУР"ҘЫҢ УҒЫН ҺЫНДЫРҘЫЛАР!

**Континенталь Хоккей Лигаһы чемпионаты сиктәрендә Өфөнөң "Салауат Юлаев" хоккей командаһы Алыҫ Көнсығышҡа - Хабаровск крайының административ үҙәге Хабаровскиҙың "Платинум Арена"һында урындағы "Амур" командаһы менән осрашты.**

Уйынға старт бирелеүгә бер минут үтеүгә, майҙан хужалары "Салауат Юлаев" ҡапҡаһына уҡталды. Ләкин 88 һан аҫтында уйнаусы ҡапҡа һаҡсыбыҙ А. Василевский ҡапҡа именлеген һаҡлап ҡалды. Был һөжүмдән һуң осрашыуҙың өсөнсө минутында юлаевсы А. Кайгородов хужалар ҡапҡаһына шайба осорҙо, тик амурҙар голкиперы А. Мурыгин был һөжүмде кире ҡаҡты. Уйын барышында ошондай һөжүмдәр йыш ҡабатланһа ла, ике яҡ та бер нисек тә ҡапҡасыларҙы алдай алманы. Был уйында ике яҡ ҡапҡасылары ла ҙур фиҙәкәрлек күрһәтте, тиһәк тә хата булмаҫ. Шулай итеп, уйын өсөн билдәләнгән өс осорҙа, йәғни 60 минут буйы таҡтала 0:0 күрһәткесе үҙгәрмәне. Өҫтәмә ваҡытта иһә, юлаевсылар осрашыуҙағы тәүге һәм хәл иткес шайбаны амурҙар ҡапҡаһына сәпәне. Игорь Мирнов менән Антти Пильстём пасын файҙаланып, Алексей Кайгородов үҙенең һәм командаһың иҫәбенә бер шайба яҙҙы.

Киләһе уйын 25 ғинуар көндө Владивосток ҡалаһында урындағы "Адмирал"ға ҡаршы үтәсәк.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МӘҘӘНИӘТ ЙЫЛЫНА...

## башланғыс бирелде



**(Башы 1-се биттә).**

Башҡортостан һәр ваҡытта ла мәҙәниәт һәм сәнғәт үҫеше кимәле менән Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән айырылып торҙо. Һуңғы йылдарҙа оптималләштереү тулҡыны милли мәҙәниәт усаҡтарына ла ҡағылып, уларҙың ҡайһы берҙәре үҙгәрештәр кисерергә мәжбүр булыуын иҫәпкә алмағанда, беҙҙә хәлдәр әлегә зарланырлыҡ түгел. Мәҫәлән, былтыр мәҙәниәт өлкәһен финанслау 27 процентҡа артҡан, 46 проект Президент грантына лайыҡ булды, бының өсөн дөйөм алғанда 106 млн һум аҡса бүленде. Быйыл да был һәм башҡа программалар тормошҡа ашырылыуын дауам итәсәк. Тимәк, яйлап ҡына булһа ла алға табан атлауҙы дауам итәсәкбеҙ, сөнки мәҙәниәт өлкәһендә булған проблемаларҙы хәл итеү өсөн тиҫтәләрсә йылдар талап ителәсәк.

- Мәҙәниәт йылында әлегә тиклем һалынған нигеҙҙе нығытып ҡалырға тейешбеҙ - йылдың маҡсаты ла ошонда. Был бөгөн ошо залда яңғыраған бөйөк музыка һәр ваҡыт һәм донъя кимәлендә лә яңғыраһын өсөн кәрәк, - тантаналы сарала ҡатнашыусы БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Салауат ҡыҙы Ғүмәрованың был һүҙҙәрендә лә ҙур мәғәнә бар - глобалләшеү шарттарында тап милли мәҙәниәтебеҙ, милли сәнғәтебеҙ беҙҙе башҡаларҙан айырып тороусы берҙән-бер үҙенсәлек түгелме һуң?

Мәҙәниәт йылы менән бергә республикала үҙенсәлекле проект та тормошҡа ашырыла башланы. Ул - "Башҡортостандың мәҙәни баш ҡалаһы" тип атала. Мәҙәниәт йылының үҙенсәлекле символы ҡаланан-ҡалаға, районан-районға күсеп йөрөп, уларҙы ваҡытлы ғына булһа ла мәҙәни баш ҡалаға әүерелдерәсәк. Ул ҙур концерт залдары менән бергә, бәләкәй клубтарҙы, китапханаларҙы ла урап үтмәйәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Милли сәнғәт тураһында һүҙ сыҡҡан һайын, башҡорт профессиональ музыка сәнғәтенә нигеҙ һалыусы талантлы композитор, музыка эшмәкәре, халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыусы йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың, дөрөҫөрәге, Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың ҡатыны Мәстүрә ханымдың: "Мин Ғәзиздән үҙ халҡынды яратыу тигән бөйөк төшөнсәгә өйрәндем", - тигән һүҙҙәре ҡабаттан иҫкә төшә. Мәҙәниәт йылы, һис шикһеҙ, төрлө сараларға бай буласаҡ, сөнки бөгөн дә милләтебеҙҙең талантлы ҡыҙ һәм улдары бихисап. Тик һәр сара һәр беребеҙҙе халҡыбыҙҙы яратырға, уға хеҙмәт итергә өйрәтә алғанда ғына мәҙәниәтебеҙ һәм сәнғәтебеҙ йәйғорҙоң ете төҫөндә нурланып балҡыясаҡ.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

АФАРИН!

# "ВИЗИТ" ФИЛЬМЫ...

## Рудольф Нуриев тураһында

**Өфөнөң "Родина" кинотеатрында "Башҡортостан" киностудияһының тағы бер яңы фильмының презентацияһы үтте. Режиссер Булат Йосопов үҙенең "Визит" тип аталған был кинофильмында донъяла киң билдәле балет бейеүсеһе, Башҡортостанда тыуып үҫкән Рудольф Нуриевтың тормошонан бер эпизодты һынландыра.**



Картина ысынбарлыҡтағы ваҡиғаларға нигеҙләнеп төшөрөлгән. 1977 йылда Өфөгә эш сәфәре менән Иордания нан король ғаиләһе вәкиле Дина бин Абдель Хәмид килә. Ул үҙенең ҡыҙы аша Рудольф Нуриев, уның тормошо менән таныш була. Шуға ла ул Рәсәйгә сәфәре ваҡытында Өфөгә барырға һәм мотлаҡ бөйөк балет бейеүсеһенең ошонда йәшәгән әсәһе менән күрешеп, уға Франция ла йәшәүсе оҙаҡ йылдар күрмәгән улынан сәләм тапшырыу теләге менән яна. Бейеүсе биографияһынан был киң билдәле булмаған факт уның шаһиты Йәүҙәт Исҡужин һөйләүе буйынса йәмәғәтселеккә билдәле була. Был авторҙың китабында тормош дөрөҫлөгө һәм Рудольфты белгән кешеләрҙең һыҙланыуҙары һүрәтләнгән, ә хәҙер инде был ваҡиғалар Булат Йосоповтың кинокартинаһында ла сағылдырыла.

- "Визит" фильмы - ул биш миллион һум күләмендәге Президент грантын яулауға хоҡуҡ алыусы иң лайыҡлы проекттарҙың береһе, - тип билдәләне үҙенең тәбрикләү телмәрендә Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова. - Ошо фильм беҙҙең республика һәм ил масштабында ғына күрһәтелеп ҡалмаҫ, тип уйлайым, әле уны Парижда Рәсәйҙең фән һәм мәҙәниәт үҙәгендә лә күрһәтеү ихтималлығы тураһында һөйләшеүҙәр алып барыла...

Фильмды "Башҡортостан" киностудияһында 2013 йылдың сентябренән төшөрә башлағандар. Унда Рәсәй актрисаһы Лаура Кеосаян, билдәле башҡорт артистары Таңсулпан Бабичева, Рәмзил Сәлмәновтар ҡатнаша. Иҫ киткес урынлы һайлап алынған актерҙар составы, матур музыка, режиссерҙар, рәссамдар, декораторҙар эше, әсә менән улдың үҙәккә үткес һөйөү тарихы бер кемде лә вайымһыҙ ҡалдырмаясаҡ, моғайын. "Картина уңышлы килеп сыҡҡан", тип ышана авторҙар һәм беренсе тамашасылар. "Был фильм - тағы ла бер ҡабат кешенең рухи асылында бер ниндәй ҙә сиктәр булмағанын, уның бер ниндәй системаға ла буйһонмағанын әйтергә тырышыу. Ябыҡ дәүләт системаһында тыуған һәм формалашҡан Рудольф Нуриев тормош тураһында, үҙенең тәғәйенләнеше тураһында күҙ алдына килтереп аңлаған һәм хәҙерге заман сәнғәтенең иң ирекле һәм бойондороҡһоҙ кешеләренең береһенә әүерелгән", - тип һөйләй режиссер Булат Йосопов.

Өфө тамашасылары өсөн "Визит" фильмының премьераһы "Родина" кинотеатрында ошо йылдың ғинуар-февралендә үтәсәк.

**Гөлфиә АКУЛОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӘКӘББЕРҘӘН...

## тәңре биҙгән

Үҙең бешермәгән ашҡа бешереүсенән алда ҡашыҡ тыҡма.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Беҙ тормошобоҙҙоң һәр йәше үренә бер ниндәй тәжрибәһе булмаған сабыйҙай барып баҫабыҙ.

**(Франсуа де Ларошфуко).**

Кешенән башҡа бар йән эйәләре лә ерҙә йәшәүҙән ләззәт алырға кәрәк икәнде аңлай.

**(Самюэл Батлер).**

Үҙеңдән өлкән ҡатын-ҡыҙҙан тулы өҫтөнлөккә ынтылма.

**(Джон Апдайк).**

Кәңәш ул шундай нәмә: аҡыллылар уға мохтаж түгел, ә иҫәрҙәр уны файҙаланмай.

**(Аноним).**

Йәшәү хәрәкәт талап итә.

**(Аристотель).**

Ахмаҡ уйҙар һәр кем башында була, ләкин аҡыллылар уны ҡысҡырып әйтмәй.

**(Вильгельм Буш).**

Гонаһлыларҙың көсө ҡасандыр бер килеп юҡҡа сыға.

**(Владимир Мономах).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер хаким урамда бер фәҡирҙе осратҡан да, уның ямаулы кейеменә, табаны айырылып сыҡҡан аяҡ кейеменә ҡарап, уны йәлләп, шулай тип өндәшкән:**

**- Әй, фәҡир, һиңә бик ныҡ ауырҙыр инде был донъяла йәшәүе...**

**- Эйе, мин ярлымын, ләкин был, мин ауыр йәшәйем, тигәнде аңлатмай әле, - тигән фәҡир кеше. - Ауыр йәшәү - ул барыр юлыңды, ундағы уңайлыҡтарҙы, мөмкинлектәрҙе, көс-ҡеүәтте белеп тә, шул юлдан бармау ул. Ямаулы кейем, табаны аҡтарылған аяҡ кейеме - ул ауыр йәшәү түгел, ул ярлы йәшәүҙе, ул уңайһыҙ ваҡытта тыуыуҙы аңлата. Ҡарағыҙ, үҙҙәренең урманында саҡта маймылдар ағастан-ағасҡа һикерә, дошманынан ҡаса, үҙенә ашар ризыҡ таба ала. Әгәр ҙә ниндәйҙер асыҡ яланға йә ҡыуаҡлыҡҡа барып эләкһә, улар үҙҙәрен ышанысһыҙ тота, һикерә лә, ырғый ҙа алмай. Сөнки улар ғәҙәти булмаған мөхиткә барып эләгә, ә бит бынан ғына улар үҙгәреп китмәйҙәр, шундай уҡ өлгөр һәм көслө булып ҡалалар, ләкин үҙҙәренең мөхитендә булмағас, көстәрен һәм һәләтлектәрен тормошҡа ашыра алмайҙар. Нисек кенә булмаһын, намыҫлы кешегә насар хаким һәм уның мут чиновниктары янында ярлы булмайынса сара юҡ. Ләкин ярлы йәшәү ауыр йәшәү түгел..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 24 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5006
Заказ 194